***Күркәм байрамығыҙ менән, хөрмәтле уҡытыусы дуҫтарыбыҙ! Тормош һынауҙарына бирешмәй, уҡыусыларығыҙға ла, ата-әсәләргә лә, дуҫтарығыҙға ла ныҡлыҡ, фиҙаҡәрлек, оптимизм өлгөһө булып йәшәгеҙ. Уңыштар һеҙгә!***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6 - 12 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№40 (510)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

### Баҙарҙарға барһаң...




3,5

### Уның исеме - уҡытыусы



6

### Үҙаллылыҡ - хоҡуҡ ҡына түгел...



8-9 үҙең һәм илең өсөн яуаплылыҡ та

### Аҡсаны уны...

бура бурап та эшләп була



13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Уҡытыусылыҡ эшен башҡа эш менән алыштыра алыр инегеҙме?

***Лиза ӘҒӘҘУЛЛИНА, Өфөләге 42-се урта мәктәптең химия уҡытыусыһы, Башҡортостандың халыҡ уҡытыусыһы:*** Юҡ, уҡытыусылыҡты бер ҡасан да башҡа бер ниндәй эшкә лә алыштырмаҫ инем, сөнки тормошомдоң бөтөн мәғәнәһен фәҡәт ошо һөнәрҙә генә күрәм. Йәш кенә сағымда тап ана шул мәктәптә балалар менән эшләр өсөн комсомолдың райком секретары вазифаһынан ҡасып, Өфөгә килдем, сөнки мин бала саҡта уҡ был донъяға уҡытыусы булыр өсөн тыуғанлығымды аңлағайным. Партия, комсомол органдарындағы вазифаларҙан ғына түгел, хатта завуч вазифаһынан да гел баш тартып килдем: башҡа вазифалар уҡытыусыны үҙ бурысын атҡарыуҙан ситләштерергә, ҡамасаулыҡ итергә тейеш түгел, тип иҫәпләйем. Уҡытыусы бөтөн иждиһатын, көсөн, иғтибарын һәм белемен балалар уҡытыуға йүнәлтергә тейеш, тигән фекерҙәмен. Ә балалар бит улар бик аҡыллылар: кем көн үтһен, эш хаҡы килһен, тип кенә йөрөй, ә ҡайһы уҡытыусы эшендә йәнен фиҙа ҡыла - улар шунда уҡ күреп, аңлап ала. Ауылда уҡытҡан йылдарҙы иҫәпләмәй, Өфөлә генә лә хәҙер 42-се йыл уҡытам. Йәш кенә уҡытыусыларҙан: "Беҙ өлкән кластарға инергә ҡурҡабыҙ, малайҙар ҙа, хатта ҡыҙҙарҙың да күбеһе тәртипһеҙҙәр, тәкәбберҙәр", - тигәнде ишеткәнем бар. "Һеҙ һуң нисек улар менән уртаҡ тел табаһығыҙ?" тип ғәжәпләнәләр миңә. Әлбиттә, абруй яулауы еңел түгел. Балаларҙы яратырға кәрәк - был уҡытыусылыҡ эшенең иң мөһим шарты, шунһыҙ мәктәп юлына аяҡ баҫырға ла ярамай. Икенсе шарт - үҙ предметыңды яҡшы белеү. Һәм, ғөмүмән, уҡытыусыға балаларҙың теләһә ниндәй һорауҙарына яуап бирерлек кимәлдә киң ҡарашлы интеллектуал булырға кәрәк. Өсөнсөһө - кешелеклелек сифатың да бик мөһим. Һәр балала шәхес күрә бел, уның күңелен үҫтер, йөрәгенә оҫҡон һал - һәм ул киләсәктә ысынлап та шәхес булып етешер. Уҡытыусы һөнәре үҙе генә лә әллә күпме һөнәр сифаттарын туплаған бит: ул ғилем эйәһе лә, методист та, тәрбиәсе лә, психолог та, актер ҙа хатта. Шағир һүҙҙәрен үҙгәртеберәк әйткәндә, биш һөнәрең миңә кәрәк түгел, бер һөнәрем шуға торорлоҡ!

***Тәнзилә БИКБАЕВА, Фатима Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһының башҡорт теле уҡытыусыһы:*** Шунын менән бик тә бәхетлемен: 38 йыл балалар уҡытам һәм үҙемде башҡа һөнәр кешеһе тип күҙ алдына ла килтерә алмайым. Әгәр йәшлеккә ҡайтырға мөмкин булып, алдымда тағы ла һөнәр һайлау бурысы торһа, мин фәҡәт уҡытыусы булырға ғына теләр инем, сөнки был минең булмышым. Уҡытыусылыҡ - ул изге ҡөҙрәт, ул - Хоҙайҙан, ә барлыҡ башҡа һөнәрҙәр - уҡытыусынан. Мәктәпкә балалар уҡытырға йөрөүсе һәр кем - йәшме ул, өлкән кешеме - ошо хәҡиҡәткә тоғро һәм лайыҡ булһын ине. Уҡытыусы булғас, бөтә яҡлап өлгә булырға, уҡытыусы абруйын һүҙең менән дә, һының менән дә, үҙеңде тотошоң менән дә, кейемең менән дә раҫларға тырышырға кәрәк, ә шулай ҙа абруйҙы эшең менән яулайһың. 38 йыл инде балаларға башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән белем бирәм. Был предметты уҡытыуҙың үҙенә генә хас өҫтөнлөгө, үҙенсәлеге бар: әсә теле һәм әҙәбиәт аша шәхес - үҙ иле һәм теле менән ғорурланырлыҡ илһөйәрҙәр тәрбиәләү мөмкинлеге. Шөкөр, был йәһәттән уҡыусыларым, уларҙың ата-әсәләре, коллегаларым алдында йөҙөм яҡты. Көн дә эшкә шатланып, ашҡынып киләм: мине балаларым көтә...

***Фәнис ШӘРӘФЕТДИНОВ, Өфөләге 145-се мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Һеҙҙең һорауға әҙер дүрт юллығым да бар әле:

*Мин һайлаған ошо*
*һөнәрҙән дә*
*Изге һөнәр бармы донъяла?*
*Балаларҙың шат*
*йөҙҙәрен күреп,*
*Күңелдәрем нурға*
*сорнала...*

Ир-егеттәрҙең мәктәпкә эшкә бармауын эш хаҡының бәләкәй булыуында ла күрәләр. Бында дөрөҫлөк бар, әлбиттә. Ләкин мин ниндәй хәлдә лә уҡытыусылыҡ эшен башҡа эшкә алыштырмаҫ инем, тием. Әҙәбиәт, сәнғәт өлкәһен яҡын күрәм. Р.Ғарипов исемендәге 1-се Республика башҡорт гимназия-интернатында ла, БДУ-ла уҡығанда ла бейеү түңәрәктәрендә шөғөлләндем, үҙем өсөн генә булһа ла шиғырҙар яҙам, шуға күрә башҡа берәй мәҙәниәт учреждениеһында йә матбуғатта ла эшләй алыр инем, моғайын. Ләкин күҙемә ҡарап ҡына торған балаларҙы ташлап китә алмаҫ инем ул.

***Фәйрүзә УТӘБАЕВА, "Йыл уҡытыусыһы" конкурсы еңеүсеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы:*** Өләсәйемдең: "Бала саҡта теләгән теләктәр тормошҡа аша ул, телә, балам", - тигән һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып, эй теләктәр теләй торғайным. Иң ҙур хыял-теләгем - уҡытыусы булыу ине. Быға Хәйбулла районы Йәнтеш мәктәбе уҡытыусыларының йоғонтоһо ҙур булды, уларға рәхмәтлемен. 11-се класта уҡыған сағымда башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса республика олимпиадаһында 1-се урын алып, БДУ-ға имтиханһыҙ уҡырға индем. Уны тамамлап, Өфө ҡалаһының 122-се башҡорт гимназияһына эшкә килгәс, бер аҙ баҙап ҡалыуым әле булһа хәтерҙә. Уҡытыусы булыу - бик яуаплы һөнәр, булдыра алырмынмы, тигән икеләнеүҙәрем булып алды. Хәҙер беләм: бар булмышыңды биреп эшләһәң, ижад итһәң, эҙләнһәң һәм, әлбиттә, иң мөһиме - балаларҙы яратһаң ғына эшең уңа. Әлеге ваҡытта баш ҡалабыҙҙың Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында - бөтә уңайлыҡтары булған заманса мәктәптә, алдынғы ҡарашлы директор етәкселегендә эшләүемә һөйөнәм, коллективтан, уҡыусыларыбыҙҙан уңдым. Үҙем һайлаған яҙмыш - уҡытыусылыҡ эшен башҡа бер һөнәргә лә, хатта аҡсалыраҡ эшкә лә, алыштырмаҫ инем. Ғөмүмән, мәктәптә матди байлыҡ артынан ҡыуғандар түгел, ә күңел хазинаһын, рухи донъяны беренсе урынға ҡуйған ихлас кешеләр генә эшләйҙер, тигән уйҙамын. Мин дә улар рәтендә булыуым менән ғорурланам. Ер шарының ҡояшлы, саф, матур яғында - бала саҡ илендә - мәктәбемдә ҡалам.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**



ШУНДАЙ ТӘҠДИМ БАР

# МИНӘН - ГӘЗИТ, ҺИНӘН - ИТ

**Урамда бер танышымды осраттым да байтаҡ ваҡыт уның аһзарын тыңлап торорға тура килде. Элегерәк быңдай кешеләрҙең борсолоуҙарын йөрәгем аша үткәреп, үҙем ауырыуға һабыша торғайным. Был юлы иһә танышымдың бер генә зарын да йөрәгемә яҡын ебәрмәнем: улаҙың барыһы ла уның үҙенең ғәйебе, тормош һынауҙарын дөрөҫ ҡабул итмәүе арҡаһында барлыҡҡа килгән, үҙенде үҙгәртһәң, еңел генә юҡҡа сыға торған зарланыуҙар ине.**

Бер аҙ торғандан һуң ҡапыл ғына:"Ә һин "Киске Өфө"нө уҡыйһыңмы?" - тигән һүҙҙәрҙе ысҡындырыуымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. "Юҡ..."- тине был аптырап. "Йәл, был баҫма һинең әле һөйләгән бар зарҙарыңдан дауа, уҡы һин уны",- тинем дә тиҙ генә уның янынан китә һалдым.

Ысынлап та, бигерәк ныҡ зарланырға өйрәнеп алдыҡ шул беҙ. Берәйһенән "Хәлең нисек?" тип һораһаң, мотлаҡ ауырыуҙары тураһында һөйләй башлаясаҡ. "Ғаилә хәлдәрең нисек?" тип һораһаң, ир эшләмәй, эсә, ә балалар тыңлашмай, тип зарын түгәсәк. "Эштә нисек һуң?" тиһәң, әлбиттә, уны күрә алмаған, унан көнләшкән, уны эҙәрлекләгән, уның тураһында ғәйбәт һатҡан хеҙмәттәштәр фашланасаҡ. Бына шулай йәшәйбеҙ.

Йәмғиәтебеҙҙең шулай аһ-зарҙарға, ғәйбәттәргә, көнсөллөккә, нәфрәткә бата барыуын шәйләп, шул сирҙәребеҙҙән ҡотҡарыу юлдарын, алымдарын күрһәтеүсе "Киске Өфө"-бөҙ дөп-дөрөҫ юлда бит. Тик уны милләттәштәрҙең барыһы ла уҡымауы үкенесле. Ҡайҙа барһам да, кем менән осрашһам да, ауылға ҡайтҡанда ла шул һорауҙы бирә һалам: "Киске Өфө"нө уҡыйһыңмы?" Уҡыйым, тиһәләр ҙә, уҡымайым, тиһәләр ҙә һөйләшеүҙе гәзиттә баҫылған берәй мәҡәләләге темаға борам. Ниндәйҙер оло яңылыҡ ишеткән кеүек тыңлайҙар. Хәйер, яңылыҡ та түгел бит инде минең был һөйләгәндәр. Ә онотола төшкән иҫке яңы хәбәр. "Киске Өфө" бит ниндәйҙер яңы хәҡиҡәт, яңы ҡағиҙәләр, яңы ҡанундар, ҡыҫҡаһы, велосипед уйлап сығармай, ул халҡыбыҙҙың аҡыл хазинаһын берәмтекләп йыйып алып, беҙгә еткерә, хәтеребеҙҙе яңырта, уйланырға, көнелебеҙгә күҙ һалырға өйрәтә.

Ошо көндәрҙә бер йәтеш уй башҡа килде әле. "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы бар бит редакцияның, шуға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзит яҙҙырығыҙ, тиелә унда. Был юҡтан ғына уйлап сығарылмағандыр. Ысынлап та, ауыл халҡының, ҡаланыҡыларҙан айырмалы, уҡыуға һөйөүе һүрелмәгән әле, тик гәзиттәргә яҙҙырырға мөмкинлектәре генә самалы. **Ә бына һәр кемдә ит, картуф бар. Уларҙы барыбер һатып алабыҙ, тип уйланым да, ауылда йәшәгән таныштарыма, туғандарыма "Киске Өфө" гәзитен яҙҙырҙым. Квитанцияһын конвертҡа һалып, һәр береһенә хат яҙҙым: "Бына һеҙгә "Киске Өфө" гәзите, ярты йылға 360 һум 24 тин, һуғымдарығыҙҙы һуйғас, кило ярым ит йә ике-өс биҙрә картуф бирерһегеҙ".** Шулайтып, милләт өсөн үтә кәрәкле баҫманы таратыуға үҙ өлөшөмдө индереү ҙә, ауылдағыларҙың уҡыуға булған танһығын ҡандырыу ҙа булды теләгем. Ошоно ғына эшләй алмайбыҙмы ни, мөхтәрәм йәмәғәт? Әйҙә, ҡушылығыҙ әле һеҙ ҙә минең башланғысҡа.

**Сәлиә АБЫҘБАЕВА.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

• 2003 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә яҙылырға була.** Сентябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыға - **"Айыҡ туй сценарийҙары"**, 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың **"Мин айыҡ тормош башланым"** китаптарын бүләк итәсәкбеҙ.

• Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

• **Иғтибар! 11 октябрҙән 21-нә тиклем гәзит-журналдарға яҙылыуҙың Бөтә Рәсәй декадаһы иғлан ителә. Ошо арауыҡта "Киске Өфө"гә лә арзанырак хаҡҡа яҙылып буласаҡ. Ашығығыҙ, дуҫтар!**

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**




Өфө ҡалаһы Орджоникидзе районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республиканың мәғариф хеҙмәткәрҙәрен һөнәри байрамдары менән ҡотланы. Байрам алдынан Профсоюздар йортонда республика уҡытыусыларын ҡотлау тантанаһы булып үтте. Был сарала "Мәғариф" милли проекты сиктәрендә федераль грантҡа эйә булған 37 уҡытыусы, башҡорт һәм рус телдәре буйынса республика конкурстарында еңеүсе 50 уҡытыусы, шулай БР Президенты гранттары менән билдәләнгән 25 уҡытыусы үҙ бүләктәрен алып шатланды. Ошондай уҡ матур тантана баш ҡала уҡытыусылары өсөн дә үтте.

✓БР Фәндәр академияһы академигы, биология фәндәре докторы Эльза Хөснөтдинова РФ Президенты эргәһендәге фән һәм мәғариф буйынса Совет составына индерелгән. Был Советта Рәсәй Фәндәр академияһы президенты Юрий Осипов, Мәскәү дәүләт университеты ректоры Виктор Садовничий, академик Евгений Примаков кеүек билдәле кешеләр бар.

✓Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте хеҙмәткәрҙәре 24-26 сентябрҙә Төркмәнстандың баш ҡалаһы Ашхабадта уҙғарылған "Китап - хеҙмәттәшлек һәм үҫеш юлы" VII Халыҡ-ара китап күргәҙмә-йәрминкәһендә ҡатнашты. "Рәми Ғарипов. Тормошо һәм ижады" фотоальбомы "Нәфис әҙәбиәт" номинацияһында еңде һәм диплом менән бүләкләнде. Был сара ил кимәлендә китап индустрияһының уңыштарын күрһәтеү, донъя халыҡтарының әҙәбиәте менән танышыу маҡсатында үткәрелә.

✓Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтенең рәсми сайтында www.kitap-ufa.ru 14 томлыҡ "Улар еңеү менән ҡайттылар" китабының электрон варианты урынлаштырылған. Унда Бөйөк Ватан һуғышынан иҫән әйләнеп ҡайтҡан 258 мең яугирҙың исеме индерелгән. Хәҙер интернет менән файҙаланыусыларҙың djvu форматында кәрәкле томды күсереп алыу һәм үҙҙәренең еңеү менән ҡайтҡан яҡындары тураһында мәғлүмәт алыу мөмкинлеге барлыҡҡа килде. Быға тиклем 20 томлыҡ "Тыл геройҙары" серияһы бушлай күсереп алыу өсөн тәүге баҫма булды. Бынан тыш, бөгөнгө көндә интернет-кибеттә 100-ҙән ашыу китап һатыуға сығарылған.

**Большевиктар партияһы лидеры В.И. Лениндың 1917 йылда әйткән һүҙҙәре хәтергә килеп төштө: "Большевиктар бик күп таптҡырҙар һөйләгән революция, ниһайәт, тормошҡа ашты!" Рәсәй ҙә ҡуйырҙан ҡуймай мөрәжәғәт итә торғас, Бөтә донъя Сауҙа ойошмаһы (ВТО) составына инеп, уның тулы хоҡуҡлы ағзаһы булып китте. Быға ҡыуанырғамы, әллә бошонорғамы, был аҙым файҙағамы, әллә зыянғамы? Бөгөнгө уйланыуҙар ана шулар хаҡында.**

# БАҘАРҘАРҒА БАРҺАҢ...




Рәсәй Президенты Владимир Владимирович Путин да бер сығышында ойошмаға инеүгә үҙенең ҡарашын ошолай тип белдергәйне: "ВТО - это не абсолютное благо и не абсолютное зло". Нисек кенә булмаһын, Рәсәйҙең ВТО-ға инеүенә ҡарата фекерҙәр ифрат күп төрлө: кемдер ыңғай ҡарашта, кемдер ҡырыҫ дәлилдәр килтереп, киреһен иҫбатлай. Ниндәйерәк ойошма һуң әле ул ВТО (аббревиатураны тәржемә итеп тормай, шул килеш кенә килтерәм) тигәндәре, уның асылы нимәлә? Был ойошма 1947 йылдан бирле эшләп килә, тәүбашта икенсерәк исем аҫтында йәшәй ине, 1995 йылдың 1 ғинуарынан һуңғы атама менән йөрөтөлә башланы. Бөгөн уның сафында 157 ил иҫәпләнә (әйткәндәй, Рәсәй уға 156 булып инде). Ә ВТО-ның асылына килгәндә, ул хәйриә ойошмаһы түгел, бергәләп, килешеп, донъя кимәлендәге баҙар майҙанында һатыу итеү өсөн ойошторолған берләшмә. Унда ағза булып ингән ил сауҙа өлкәһендә ҡайһылыр кимәлдә иркенлектәр, ташламалар алыуға өлгәшә. Әммә барыбер там иткән хәйер-саҙаҡаға өмөт самалы, ойошма ағзаларына бер кем дә бер нәмәне лә бушлай ғына килтереп тотторамаясаҡ, үҙ-ара мөнәсәбәт тә килемдә ҡат-ҡат иҫәпләгән сауҙа ҡануындарына бәйле барасаҡ.

Буштың атаһы күптән үлгән, сысҡан тәпеһендәге сыр ғына бушлай тәҡдим ителә бит ул. Күҙ алдыгыҙға килтерегеҙ әле: халыҡ менән шығырым тулы оло баҙарҙы: унда әҙәп, гәҙеллек, кешелеклелек тураһында һүҙҙең булыуы мөмкин дә түгел, кем йылғыр, кем әрһеҙ, кемдең тауары үтемле, шул ота, әгәр был өлкәлә маһирлығың самалы икән, ауыҙыңды асып, аңшайып тороп ҡалыуың да бар. Беҙҙең халыҡтың психологияһына килгәндә, теләйбеҙме быны, әллә юҡмы, бөтәбеҙ ҙә совет осоронаң кешеләре, баҙар шарттарында йәшәп, алыш-биреш итеп өйрәнмәгәнбеҙ. 74 йыл арауығында тиндәр өсөн бил бөгөп, тигеҙ эш хаҡы алып йәшәнек һәм эшләнек, шуны юғары ғәҙеллек билдәһе тип иҫәпләнек. Йәнә хеҙмәттә илке-һалҡы йөрөп, дәүләттең елкәһен бушлай кимереп өйрәндек тә, ул тарҡалғас, баҙап ҡалдыҡ, аҡса таба, шөғөлөбеҙҙә яйға һалып килем ала белмәйбеҙ. Шулай итеп, беҙ, социализм кешеләре, көтмәгәндә капитализмға тартым йәмғиәткә барып индек. Союз тип аталған система емерелгәс, 90-сы йылдарҙа тәрән кризис башланды, уның кире эҙемтәләрен әле лә тойомлайбыҙ. Ә илдәге бөгөнгө "кырағай баҙар" гәмәлдәге ҡотолғоһоҙ хәл, ысынбарлыҡ. Осто-осҡа саҡ ялғап көн итеп ята инек, тормошобоҙға ВТО тигән нәмә килеп инде. Хәйер, беҙгә шаҡ ҡатаһы түгел, "шок терапия"-һын, хосусилаштырыуҙы, ваучерҙар таратыуҙы баштан үткәрҙек бит инде, быныһына ла күнербеҙ, бәлки, тик донъя кәштәләрен яуларлыҡ тауар етештермәйенсә тороп, унда һатыу итергә ынтылыу ғәжәпләндерә, бик күп һорауҙар тыуҙыра.

Баҙар, тигәндәй, һирәкләп булһа ла ҡалалағы колхоз баҙарына инеп сыҡҡылайым. Барғанда гел шуға иғтибар итәм: ҡапҡа ауыҙында ҡойто ғына кейенгән бер ҡатын һатыу итә. Эскәрәк, түргәрәк үтер ине, кимәле лә, йүнле һатыр нәмәһе лә юҡ, сауҙа оҫталығы, тамаҡ ярып халыҡты йәлеп итә белеү был ҡатынға Хоҙай тарафынан бирелмәгән. Тәҡдим иткәне - ҡағыҙҙары ҡаҡашҡан чупа-чупстар ҙа, арзанлы һағыҙҙар, ҡаптары таушалып бөткән тәмәке. Көндәр буйы һерәйһә лә ул байғоштоң янына килеүсе, тәҡдим иткән нәмәләре менән ҡыҙыҡһыныусы юҡ, тора инде шунда тамаҡ хаҡына ваҡыт үткәреп. Был ҡатын баҙарсыға түгел, теләнселәп хәйер йыйырға сыҡҡан асарбаҡҡа оҡшаған. Рәсәй Сауҙа ойошмаһына инде, тигән хәбәрҙе ишеткәс, нишләптер, кинәт кенә шул ҡапҡа ауыҙы, һатып алырға ярачһыҙ тауарҙар иҫкә килеп төштө.

Икенсе яҡтан уйлап ҡараһаң, теләйбеҙме беҙ быны, әллә юҡмы, донъяла барған хәл-ваҡиғаларҙан ситләшә алмайбыҙ, үҙ йортоңа бикләнеү, күршең менән аралашырға теләмәү бер ваҡытта ла ыңғай һөҙөмтә бирмәй. Тимәк, Сауҙа ойошмаһына инеү заман талабы, был кәрәк кенә түгел, бәлки, мотлаҡтыр ҙа. Быны ошондайыраҡ береһе икенсеһен инҡар иткән ике фекер әйттем. Ләкин ошо ерҙә ғәҙеллек хаҡына шуны ла өҫтәү дөрөҫ булыр, ойошмаға инеү бөгөн-иртән генә ниндәйҙер һөҙөмтә бирмәйәсәк, уның татлы емештәрен, йәйһә әсе һурпаһын киләсәктә татыясаҡбыҙ. Шулай ҙа баҙар ойошмаһына инеүҙең ҡайһы бер яҡтарын алдан күҙалларға тырышып ҡарайыҡ, тик бында ыңғайҙан бигерәк эсте бошорғос яҡтары күберәк.

Донъя баҙарында нефть һәм газ менән элек тә һатыу иттек, киләсәктә лә итәсәкбеҙ,сөнки ҡара алтын менән зәңгәр яғыулыҡ беҙҙең йәшәү сығанағыбыҙ, уларға тәғәйенләнгән хаҡтарҙың күтәрелеп йә төшөп китеүе көндәлек тормошобоҙға туранан-тура йоғонто яһай. Тимәк, сауҙа ойошмаһы киләсәктә ошо ике сығанаҡҡа һиҙелерлек тәьҫир итә алмаясаҡ, сөнки был йүнәлеш яйға һалынған, һатып алыусыларыбыҙ күптән билдәле, улар менән килешеүҙәр әллә ҡасан уҡ төҙөп ҡуйылған.

Белгестәр фекеренсә, Сауҙа Ойошмаһына инеүҙән ҡайһылыр кимәлдә металлургтар, минераль ашлама етештереүселәр, иген, хәрби техника һатыусылар, машина эшләүселәр отасаҡ. Иҫәпләгәндәремдең тик икеүһендә генә туҡталайыҡ. Иген һатыуға килгәндә, беҙҙә уның тормошҡа ашмаҫы бер кемдә лә шик тыуҙырмай. П.А. Столыпин заманында, уҙған быуаттың башында Рәсәй ҡул менән эшкәртеп иген үҫтереп сит илгә һатты, был хаҡта тарихтан уҡып беләбеҙ. Ә бөгөнгө ауыл хужалығының ташландыҡ хәле, ауылдарҙың юҡҡа сыға барыуы бер кемгә лә сер түгел, колхоз-совхоздар бөтөрөлдө, фермер хужалыҡтары тулы ҡеүәтендә эшләп китә алмай, күптәре ҡағыҙҙа ғына иҫәпләнә. Шул шарттарҙа сит илгә иген һатыу тураһында һүҙҙең булыуы мөмкинме? Ярай, мөғжизә ҡылып, ауыл хужалығын яйға һалдыҡ та, ти, әммә ләкин беҙҙәге ҡырыҫ, ҡырыҫ ҡына түгел, ауыһыҙ тәбиғәт шарттарын алдан күҙаллап буламы ла, уға ышанып буламы? Сауҙа ойошмаһына ингәндәр араһында иң тоторохһоҙ һауа шарттарында йәшәгән ил, моғайын да, беҙҙер ул. Ана шул тоторохһоҙлоҡ үҫтерелгән ауыл хужалығы продукцияһының хаҡында, уға тотонолған сығымдарҙа сағылыш таба. Һуңынан хисаплап сығарһаҡ, етештергәнебеҙ ысын мәғәнәһендә алтын хаҡына барып олғаша. Шуға күрә Рәсәйҙә ауыл хужалығы бер ваҡытта ла рентабелле эшләй алманы һәм алмай, ул һәр ваҡыт дәүләт яҡлауына мохтаж.

Инде машиналар етештереүгә туҡталайыҡ. Сит яҡтарға был хаҡта мәғлүм булмаһа ла, ил буйынса "Москвич", "Запорожец"тар хаҡында күпме көләмәстәр йөрөй, ҡалғандары ла иномаркалар эргәһендә эшкинмәгән тимер-томор өйөмө генә. Сит илдәр менән ярышырлыҡ машиналар етештерә белмәнек һәм белмәйбеҙ, ошонан аҙаҡ уларҙы кем генә һатып алыр икән? Сит тарафтарҙан тотонолған иномаркалар беҙҙең илгә килеп тулһа, машина етештереү өлкәһе бөтөнләй юҡҡа сығып ҡуйыуы ла ихтимал, ихтимал ғына түгел, шулай буласаҡ та.

Еңел сәнәғәт өлкәһендә лә шул уҡ хәл, магазинға барһаҡ, иң әүәл сифатлы кейем эҙләй башлайбыҙ. Сифатлыһы шул импорттыҡы инде. Аҡсалылар импортты ҡарай, ярлылар арзанлыға ынтыла. Ә арзанлыһы бер генә кейеп сыҡмалы Ҡытай аламаһы. Тимәк, был өлкәлә лә беҙ отолоусы хәлендә.

(Дауамы 5-се биттә).

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов РФ Премьер-министры Дмитрий Медведев үткәргән видеоконференцияла ҡатнашты. Сара был юлы граждандар обороньһы буйынса дөйөм милли күнекмәләргә арналды.

✔Санкт-Петербургтың Д.Д.Шостакович исемендәге академик филармонияһында 7 октябрҙә Владимир Спиваковтың Халыҡ-ара мәрхәмәтлек фонды стипендиаттары концерты буласаҡ. Унда Башҡортостандың Мәскәүҙә һәм Өфөлә уҡыған йәш музыканттары Асия Ғарипова, Гөлназ Сәхипгәрәева, Дилара Иҙрисова, Булат Насиров, Искәндәр Ханнанов, Элиза Хәнәфина, Денис Хәсәйенов ҡатнашасаҡ.

✔М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының рус теле һәм әҙәбиәтенән Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләү буйынса Фәнни-мәғариф үҙәгендә Өфөнөң 9-11 кластары уҡыусыларына диагностика һынамыштары үткәрелә. Һынамыштар 13 октябрҙә университеттың өсөнсө корпусы 401-се аудиторияһында 15 сәғәттә ойоштороласаҡ. 273-38-81, 8-927-95-00-921 телефондары аша яҙылырға мөмкин.

✔БР буйынса "Россельхознадзор" идаралығы белгестәре быйыл туғыҙ айҙа республикаға ситтән килтерелгән продукцияның 906 осрағында дүрт төрлө карантин объекты асыҡлаған. Ырымбур, Һамар, Ульяновск өлкәһенән индерелгән көнбағышта, Нидерландынан килтерелгән сәскәләрҙә һәм бүлмә гөлдәрендә, Удмуртиянан килтерелгән картуфта асыҡланған был зарарлы матдәләр. Әйтеүҙәренсә, карантин сүп-сары менән бысранған продукция техник эшкәртеүгә ебәрелгән, ә сәскәләр юҡ ителгән.

✔БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт буйынса министрлыҡта "Йәш ғаилә" республика конкурсы финалына әҙерлек башланған. Унда район йә ҡала кимәлендәге һайлап алыу турҙарында еңеүселәр ҡатнашасаҡ. Ғаризаны 24 октябргә тиклем Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 10 адресы буйынса ебәрергә кәрәк. Телефон: 276-45-87. Финалда ҡатнашыусылар исемлеге 12 ноябрҙә билдәле буласаҡ, еңеүселәр 13 ноябрҙә гала-концертта билдәләнәсәк.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Һөҙөмтәлә улар тестар үткәреү мөмкинлеген биргән автоматлаштырылған интерактив уҡыу бүлмәһе менән бүләкләнгән. Был приз уҡыу йортоноң компьютер класын камиллаштырырға ярҙам итәсәк.*



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАШ ҠАЛА БАЙРАМ ИТӘ!




**Республикабыҙҙың барлыҡ район-ҡала, ауыл биләмәләре ошо көндәрҙә оло байрам тантанаһы кисерә һәм шул айҡанлы төрлө саралар уҙғара. Бынан 22 йыл элек 11 октябрҙә Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителгәйне. Ошо йылдар дауамында был дата байрам итеп кенә түгел, ә республиканың ҡаҙаныштарын барлау, киләсәккә аныҡ пландар ҡуйыу, яңы бейеклектәргә ынтылыу көнө булараҡ та ҡабул ителә.**

Байрам саралары республиканың төрлө мөйөштәрендә төрлөсә сағылыш таба. Баш ҡаланың Ленин районы кисә, йәғни 5 октябрҙә, Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында тантаналы йыйылыш үткәреп, унда хеҙмәт алдынғылары тәбрикләнһә, Орджоникидзе районы биләмәһендә 1-12 октябрҙә Республика көнөнә арналған байрам саралары ойоштороласаҡ. 10 октябрҙә экология-биология үҙәгендә "Хыялланабыҙ. Фантазияны эшкә егәбеҙ. Ижад итәбеҙ" тип аталған тәбиғи материалдан эшләнгән эштәрҙең күргәҙмәһе үтһә, 19 сәғәттә Иҫке Турбаҫлы ауылында байрам программаһы тәҡдим ителәсәк.

11 октябрҙә С. Орджоникидзе исемендәге майҙанда "Ҡурай моңо" тип аталған байрам башланһа, 14 сәғәттә майҙан түрен йәштәр биләйәсәк. Быйыл унда "Белый ворон" бард йырҙарын башҡарыусылар ҙа ҡатнашасаҡ. 18 сәғәттә Яңы Черкассы ҡасабаһында байрам программаһы ойоштороласаҡ.

Калининдар иһә 11 октябрҙә "Сәскә ат, тыуған Башҡортостан!" һәм "Башҡортостан - Урал ынйыһы" тип аталған, райондың ижад коллективтары ҡатнашҡан байрам программаһы тәҡдим итәсәк. Шулай уҡ Аксаков байрамы, райондың ир-азаматтар фестивале һәм башҡа мәҙәни программа ҡаралған.

Шулай ҙа баш ҡалалағы байрам тантаналарына беренсе тапҡыр үтәсәк "Өфө - дуҫлыҡ һәм берҙәмлек ҡалаһы" тип аталған профессиональ ижад коллективтарының фестивале айырым сағыулыҡ өҫтәйәсәк. Уның маҡсаты булып төрлө яҡлы ижади, мәҙәни бәйләнештәрҙе нығытыу, һөнәри аралашыу, мәҙәни алмашыу тора. Фестивалдә ҡатнашырға Өфө, Силәбе, Ырымбур, Түбәнге Новгород, Ижевск, Пермь, Екатеринбург һәм БДБ илдәренең баш ҡалалары - Астана, Бишкәк, Дүшәнбе, Ташкент теләк белдергән. 10 октябрҙә Ҡала мәҙәниәт һарайында сара тантаналы асылһа, 11 октябрҙә, 14 сәғәттән 17 сәғәткә тиклем өфөләләр һәм баш ҡала ҡунаҡтары фестивалдә ҡатнашыусыларҙың сығыштарын Рус дәүләт академия драма театры алдындағы майҙанда тамаша ҡыла аласаҡ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Балалар баҡсаһының мөһимлеге хаҡында оҙаҡ һөйләп тороу кәрәкмәй, сөнки эшләп йөрөүсе ата-әсәләр өсөн ул ҡотҡарыу сараһы. Ләкин күп ғаиләләр тағы ла бер мәсьәләне хәл итеүҙең төрлө юлдары һәм алымдарын эҙләргә мәжбүр. Ул да булһа, оло йәштәге атай-әсәйҙәрҙең балалары эштә саҡта ҡараулы һәм тәрбиәле булыу проблемаһы.**

# ОЛОЛАР ӨСӨН...

## "дедсад" асмаҡсылар



Ысынлап та, минут һайын өйҙә ҡалған ололарҙы уйлап, уларҙы ҡайғыртып, эштең рәте лә, йәме лә юғалырға мөмкин. Ләкин өфөләләр өсөн был мәсьәлә сиселергә тора, тип белдерәләр ҡала округы хакимиәтендә. Баш ҡалала оло йәштәге кешеләрҙе ваҡытлыса урынлаштырыу учреждениелары асырға ниәтләйҙәр. Был хаҡта журналистар менән матбуғат конференцияһында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Әлфирә Баҡыева белдерҙе. Уның әйтеүенсә, иртән эшкә юлланыусылар оло йәштәге атай-әсәйен был учреждениела ҡалдырып китә лә, кис килеп ала. Ололар өсөн "дедсад"та ашау-эсеү, ял итеү, дауалау курстары ойоштороласаҡ һәм төрлө түңәрәктәр эшләйәсәк. Проект әлегә тик ҡағыҙҙа ғына һәм уны тормошҡа ашырыу өсөн бағыусылар табырға кәрәк. Ә хакимиәт, үҙ сиратында, бындай учреждениелар өсөн биналар бүлергә вәғәҙә итә. Ҡала округы хакимиәтендә белдереүҙәренсә, йыл аҙағына тиклем шулай уҡ ололар өсөн ҡараусылар хеҙмәте һәм социаль такси үҙ эшен башлаясаҡ.

Статистикаға ярашлы, Өфөлә йылдан-йыл пенсионерҙарҙың һаны арта. Мәҫәлән, 1998 йылдан алып уларҙың һаны 22 проценттан 25,4 процентҡа, йәғни 273,4 мең кешегә, артҡан. Бөгөнгө көндә баш ҡалалағы һәр дүртенсе кеше - хаҡлы ялда. Әлфирә Миңнулла ҡыҙы билдәләүенсә, 5 мең оло йәштәге гражданға үҙенең йорт шарттарында социаль ярҙам күрһәтелә. Социаль хеҙмәткәрҙәр ололарға һәм инвалидтарға магазиндан аҙыҡ-түлек, дарыуханаларҙан кәрәкле дарыуҙар һатып алыша, уларға ашарға бешерә, кер йыуа, бөтәһе 30-ҙан ашыу эш башҡара. Матбуғат конференцияһында билдәләнеүенсә, бөгөн оло йәштәге кешеләрҙе хеҙмәтләндереүсе социаль хеҙмәткәр булып эшләргә бик үк атлығып тормайҙар. Күптәргә бында эш хаҡының аҙ түләнеүе оҡшамай. Шулай ҙа был эшкә беренсе осраған кеше лә алынмай, ул һайлау, төрлө яҡлап тикшерелеү баҫҡыстарынан үткәндән һуң ғына эләгеп китә ала был урынға.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЕҢЕҮ ӨСӨН ШӘП БҮЛӘК

**Өфө Урман техникумы урмансылыҡ уҡыу йорттары студенттарының Йошкар-Олала уҙған III Бөтә Рәсәй йәйге спартакиадаһында беренсе урын яулаған.**

Еңеүгә пневматик винтовканан атыуҙа һис кемде алдына сығармаған Вероника Вәлиева менән Илгиз Байтимеров, шулай уҡ команданың йөҙөүселәре, 100, 1000, 3000 метрға йүгереүселәре ҙур өлөш индергән. Һөҙөмтәлә улар тестар үткәреү мөмкинлеген биргән автоматлаштырылған интерактив уҡыу бүлмәһе менән бүләкләнгән. Был приз уҡыу йортоноң компьютер класын камиллаштырырға ярҙам итәсәк. Әлеге ваҡытта бүлмәне монтажлау бара. Тиҙҙән уҡытыусылар уның ярҙамында белем генә биреп ҡалмаясаҡ, ә студенттарҙың белемен тикшерә лә аласаҡ.

# ИДАРАСЫ БУЛҒЫҢ КИЛҺӘ...

**Башҡорт дәүләт университеты ҡарамағындағы Дәүләт идараһының кесе академияһы (МАГУ) тыңлаусылар йыя.**

Дәүләт идараһын үҙенә һөнәр итеп һайлаған студенттарҙы әҙерләүсе бындай уҡыу йорттары 2006 йылда Түбәнге Новгородта һәм Пермдә барлыҡҡа килә. Әлеге ваҡытта улар Волга буйы федераль округының 14 субъектында, шул иҫәптән 2009 йылдан алып Башҡортостанда БДУ базаһында эшләй.Тыңлаусылар МАГУ-ға конкурс нигеҙендә алына. Документтар 6 октябргә тиклем иртәнге 10-дан киске 5-кәсә төп корпустың (Зәки Вәлиди урамы, 32) 336-сы бүлмәһендә ҡабул ителә. Конкурстан үтеүселәр ике йыл белем алып, йомғаҡлау һынауҙары үтергә тейеш. Проекттың маҡсаты - йәштәрҙе идара итеү эшмәкәрлегенә өйрәтеү, уларҙың сәйәси-хоҡуҡи компетентлыҡтарын һәм гражданлыҡ яуаплылыҡтарын күтәреү.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө 2013 йылда үтәсәк Ҡышҡы Халыҡ-ара балалар уйындарына әҙерлекте дауам итә. Дирекцияла көн дә Рәсәйҙең һәм донъяның төрлө төбәктәренән белдереүҙәр, сарала ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул ителә. Әлеге көнгә ун илдән 19 ҡала һәм Рәсәйҙән һигеҙ ҡала сарала ҡатнашырға теләк белдергән. Канадала үткән V Ҡышҡы Халыҡ-ара балалар уйындарында донъяның 12 иленән йәш спортсылар ҡатнашҡан булған. Өфөлә ҡатнашыусылар күберәк булыр тип көтөлә. Ошо көндәрҙә баш ҡалаға рәсми визит менән Халыҡ-ара балалар уйындары Комитетының генераль секретары Ричард Смиттың килеүе көтөлә.

✓Өфөлә юл ремонтлау эштәренең оҙаҡҡа һуҙылыуына зарланыуҙар күбәйҙе. Өфө ҡала округы хакимиәте граждандарға ваҡытлыса уңайһыҙлыҡтарҙы аңлап һәм түҙемлек менән ҡараһындар ине, тигән үтенес белдерә. Юлдарға капиталь ремонт үткәреү үҙ эсенә тотош эштәр комплексын ала. Мәҫәлән, ямғыр һыуҙарын ағыҙыу канализацияларын ремонтлау һәм яңыларын төҙөү бик күп көс һәм ваҡытты ала. Әле бына Үҙәк баҙар районында ямғыр һыуҙары канализацияһы яңыртылып бөттө. Ә инде транспорт хәрәкәтен тотҡарлай торған асфальт һалыу эштәре ял көндәрендә ҡараңғы төнгә тиклем башҡарыла.

✓Өфөнөң Октябрь проспектындағы Дан бульвары туҡталышы тапҡырында юлдың бер йүнәлеше ягы 8 октябрҙән ваҡытлыса ябыла. Унда ер аҫты юлы төҙөлә башлаясаҡ.

✓Сентябрь аҙағында Астанала билбау көрәше буйынса донъя чемпионаты үтте. Рәсәйҙең йыйылма командаһы составында ҡатнашыусы Башҡортостан егеттәре - Альберт Рәхмәтуллин 75 кг ауырлыҡ категорияһында, Рөстәм Арыҫланов 100 кг ауырлыҡ категорияһында донъя чемпиондары булды.

✓Октябрь проспектында алып барылған ике ер аҫты үткәүеле төҙөлөшө сәбәпле, транспорт тығындары барлыҡҡа килде. Был хәлде Шаҡшанан Димгә тиклем йөрөүсе ҡала электричкаһы бер аҙға еңеләйтеүе мөмкин, тип иҫәпләй баш ҡала округы хакимиәте етәкселәре. Был маршрут 9 туҡталышты үҙ эсенә ала һәм был юлды электричка 36 минутта үтә.

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# БАҘАРҘАРҒА БАРҺАҢ...

**(Башы 3-сө биттә).**

Тағы ла алып сығып һатыр нимәбеҙ бар әле? Хәтеремдән сыға яҙған, урманыбыҙ бар ҙа баһа! Әммә ләкин бында ла хәлдәр шәптән түгел, Петр батша заманынан килгән урман хужалығын алып барыу системаһы емерелде, бөгөн урманға Үҙәк хужа, ғәмәлдә бер кем дә хужа түгел! Ул дөрләп яна, һүндереүсеһе юҡ, ҡабатлап әйтәм, ул бер кемдеке лә түгел. Белорет районын үтешләй тау битләүендә урман яныуын күреп, машинаны туҡтаттым. Ауыл ситендә бер төркөм ирҙәр вайымһыҙ ғына тәмәке көйрәтә. "Егеттәр, - тинем, - күрмәйһегеҙме ни, урман яна бит, һүндерһәгеҙсе?" Битараф яуап ишетелде: "Янһасы, беҙҙеке түгел бит ул!" Урмандарҙың шулайтып юҡҡа сығыуын һирәкләп булһа ла телевидение аша күрһәтәләр, аҙаҡтан сит илдәрҙәге янғындарҙы ла өҫтәп ҡуйырға онотмайҙар, күрегеҙ, йәнәһе, беҙҙә генә түгел, күршеләрҙә лә шул уҡ хәл. Янғындарҙың сәбәбе ниҙә? Янғын ҡағиҙәләрен һанға һуҡмау һөҙөмтәһе, тиер бәғзеләр. Бәлки, шулайҙыр ҙа, ләкин гонаһ шомлоғона ҡаршы, мин икенсерәк уйлайым бит әле. Эш шунда: хәҙер урмандарҙы оҙайлы ваҡытҡа арендаға бирә башланылар, йәғни арендаға алыусы шул биләмәнең ысын хужаһына әүерелә, хатта унда инеп еләк-емеш, бәшмәк йыйыуҙы, аҡланында ултырып ял итеүҙе лә тыя ала. Бер һүҙ менән әйткәндә, боронғо алпауыт инде. Шулай булғас, урындағы халыҡ ниңә көйөнһөн ул урман өсөн. Улар көйөнмәгәс, улар ҡул ҡаушырып торғас, самолеттар ярҙамында ғына янғынды баҫып булырмы икән, белмәйем...

Ярай ҡалған-боҫҡан урманды йығып һаттыҡ та икән ти, хәлбүки унан да фәтүә самалы буласаҡ, сөнки шул уҡ урманды сит илдә эшкәртеп, бысҡы таптарына тиклем әрәм-шәрәм итмәй, кире беҙгә килтереп, әллә күпме ҡиммәт хаҡҡа үҙебеҙҙең әйберҙе үҙебеҙгә һатасаҡтар, быныһы көн кеүек асыҡ. Кешелек донъяһы борон замандан алып энергия, сығымдар талап итмәгән, һәр ваҡыт файҙа ғына килтергән мәңгелек двигатель эшләү хаҡында хыялланған, хатта уның исеме лә бар - Перпетуум Мобиле. Ләкин ул двигателде бөгөнгә көнгә тиклем уйлап табыусы юҡ әле. Беҙҙә лә шулай: тәү ҡараштан донъябыҙ алға бара һымаҡ, хеҙмәт, көс сарыф итәбеҙ, тик ҡыҫыр тырышыуҙарыбыҙ шул мәңгелек двигателдең буштан-буш әйләнеүе саҡлы ғына. Ваҡыт үтеү менән ер аҫты һәм ер өҫтө байлыҡтарына бай илебеҙ сит тарафтарға сеймал сығарыу объектына әйләнеп ҡуймаҫмы икән? Рәсәйҙең ябай бер гражданины булараҡ, бына мине нимәләр борсой.

Советтар Союзының беренсе һәм һуңғы президенты М.С. Горбачев, берәй мөһим сараны башлар алдынан тәртип боҙорға йыйынған шуҡ малай ише хәйләкәр йылмайып: "Процесс пошел..." тип устарын ыуа торғайны. Эйе, хәйерлегә булһын инде, процесс башланды, Бөтә донъя Сауҙа ойошмаһына индек, тик нишләптер күңелдә ҡәнәғәтләнеү һәм өмөт сатҡыһы юҡ,баҙар ҡапҡаһының төбөндә тороусы теге ҡойто кейенгән, сауҙаһы бармаған ҡатын күҙ алдынан китмәй...

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

*ИҢКӘРТӘБЕҘ!*

# БЕР ҠАТЛЫЛЫҠ...
## уғрылыҡтан яман

**Йыл башынан алып ете ай эсендә баш ҡала территорияһында 5 меңдән ашыу урлашыу, шул иҫәптән 300 осраҡта - кеҫә бурҙары эшмәкәрлеге, 600 осраҡта граждандарҙың транспорт сараларын урлау теркәлгән. Өфөнөң тәүтикшереү хеҙмәткәрҙәре уғрылыҡ буйынса 2 мең енәйәт эшен тикшергән, уларҙың 1350-һе судҡа ебәрелгән.**

Полиция подполковнигы, тәүтикшереү хеҙмәткәре Эльмира Минғазова әйтеүенсә, әгәр законды ерәнә еткереп үтәүсе граждандар абай һәм һаҡ булһа, бындай енәйәттәргә юл ҡуймаҫҡа ла мөмкин. Сөнки ябайлыҡ уғрылыҡтан яман, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Бындай төр енәйәт, ғәҙәттә, урамдарҙа, йәмәғәт транспортында һәм кеше күп йөрөгән ерҙәрҙә ҡылына. Ҡағиҙә булараҡ, бурҙар кеҫә телефондарына, башҡа элемтә төрҙәренә (ноутбуктар, планшеттар), автомашиналар өсөн ҡоролмалар (навигаторҙар, автомагнитолалар һ.б.), аҡса, йәйгеһен ҡарауһыҙ ҡалдырылған велосипедтар һәм скутерҙарға ҡул һуҙа.

Үкенескә күрә, милкенән ҡолаҡ ҡаҡҡан граждандарҙың полицияға мөрәжәғәт иткән ваҡытта бик йыш айыҡ булмауы асыҡлана. Ә бит саҡ ҡына уяулыҡты юғалтыу ҙа кире эҙемтәләргә килтерә. Шул сәбәпле дауаханаларҙа, учреждениеларҙа һәм предприятиеларҙа, шулай уҡ магазиндарҙа, кинотеатрҙарҙа һәм башҡа йәмәғәт урындарында урлашыуҙарға юл ҡуйыла.

Мутлыҡ факты буйынса ҡуҙғатылған енәйәт эштәрен тикшергәндә өфөләләрҙең кешегә сикһеҙ ышаныуы асыҡлана, ти Э. Минғазова. Улар ярҙам һәм телефондарынан бер генә шылтыратыуға рөхсәт итеүҙе һораған кешеләргә бер шикһеҙ телефонын биреп ҡуя ала. Хатта телефонын ғына түгел, автомобилен, сумкаһын, сумаҙанын сит ҡулдарға ышанып тоттора. Шулай итеп, зыян күреүселәр үҙҙәре үк хоҡуҡҡа ҡаршы ғәмәл ҡылырға этәрә. Ярай ҙа, уларҙың ғүмеренә түгел, милкенә генә ҡул һуҙһалар.

**Ә нисек зыян күреүсе ролендә ҡалмаҫҡа һәм милкеңде һаҡларға? Эльмира Минғазова шундай кәңәштәр бирә:**

- Әгәр яңғыҙығыҙға ҡараңғыла ҡайтырға тура килһә, һәм был хаҡта алдан белһәгеҙ, сағыу итеп кейенергә тырышмағыҙ, алтын һәм башҡа биҙәүестәрегеҙҙе сисеп, кеҫәгеҙгә һалып алығыҙ.
- Машинаны урамда тотмағыҙ, ә телефон аша заказ биреп, такси хеҙмәте менән файҙаланығыҙ.
- Йәмәғәт транспортында ҡиммәтле әйберҙәрегеҙҙе күрһәтергә тырышмағыҙ, аҡса һанамағыҙ, сумкаларығыҙҙы һәм портфелдәрегеҙҙе биген ябып, алдығыҙҙа тотоғоҙ.
- Автомашинағыҙҙың хәүефһеҙлеге өсөн иң яҡшы вариант - гараж йәки махсус парковка урындары. Бындай мөмкинлек булмағанда төрлө ҡулайламалар һәм уларҙың именлеге хаҡында уйлағыҙ, автомобиль эсендә сумкаларығыҙҙы, портфелдәрегеҙҙе, ноутбук йәки башҡа ҡиммәтле әйберҙәрегеҙҙе ҡалдырмағыҙ.
- Сервиста йәки автойыуыуҙа автомобиль менән бергә тоҡандырыу аҫҡысын ҡалдырмағыҙ.
- Яҡындарығыҙ менән ниндәйҙер күңелһеҙлек килеп сыҡҡан, тигән шылтыратыу алһағыҙ, бигерәк тә мифик суммала аҡса түләү талап ителһә, ҡалтырап төшмәгеҙ, тыныс ҡына хәл-ваҡиғаға анализ яһағыҙ һәм бәләгә ҡалған яҡын кешегеҙгә йәки уның дуҫтарына шылтыратығыҙ. Мотлаҡ рәүештә полицияға хәбәр итегеҙ.

**Тәү ҡарашҡа барыһы ла бик ябай һәм ғәҙәти кеүек, әммә йыш ҡына ошо ҡағиҙәләрҙе онотабыҙ. Ә бит Хоҙай, һаҡланғанды һаҡлармын, тигән.**

**Ғәлиә ҒӘЙНЕТДИНОВА,
БР буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәте.**

*ИҒТИБАР!*

# МУТЛАШЫУСЫЛАРҒА ИШЕК АСМА!

**Һәр көн тиерлек мутлашыусыларҙың теге йәки был юл менән халыҡты талауы хаҡында ишетеп торабыҙ. Улар ҡулынан айырыуса оло йәштәгеләр йыш зыян күрә. Киң матбуғат саралары, телевидение һәм радио селтәре аша киҫәтеүҙәр, белдереүҙәр йыш булып торһа ла, мутлашыусылар ышаныусан халыҡты һаман алдауын дауам итә.**

Бөгөнгө көндә Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы социаль хеҙмәт, торлаҡ-коммуналь хужалығы һәм хеҙмәтләндереү буйынса коммерция ойошмалары хеҙмәткәрҙәре исеме аҫтында фатирҙарға инеп, ҡыйбатлы әйберҙәр урлап йөрөүселәрҙе эҙләй. Зыян күреүселәрҙең, шаһиттарҙың һүҙҙәре һәм видеокамера яҙмалары буйынса эшләнгән енәйәттә ғәйепләнеүселәрҙең фотоһүрәттәре полицияның 02.mvd.ru сайтына урынлаштырылған. Фотоһүрәттәге кешеләрҙе таныусыларҙы полиция 237-19-60, 242-77-15 йәки ЭЭМ-ның 128 ҡыҫҡа һанлы ышаныс телефоны буйынса шылтыратыуҙарын һорай. Мутлашыусыларҙың эҙенә сығыуға ярҙам итеүсе һәр мәғлүмәт өсөн полиция 100 мең һум күләмендә аҡсалата ярҙам вәғәҙә итә.

Республика полицияһы халыҡты уяу булырға һәм таныш булмаған кешене фатирға индермәҫкә саҡыра. Әгәр ҙә ишек ҡағыусы үҙен ниндәйҙер ойошма хеҙмәткәре итеп таныштыра икән, унан мотлаҡ рәүештә танытма һорағыҙ. Бөгөнгө көндә барлыҡ ойошма һәм учреждение хеҙмәткәрҙәре фотоһүрәтле танытмалар менән тәьмин ителгән һәм улар, халыҡтың беренсе талабы буйынса, танытмаларын күрһәтергә бурыслы.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ҺЫРАҒА КӨН БӨТӘ...

**"Реклама тураһында"ғы законға 2012 йылдың 23 июленән һәм 1 сентябрҙән төҙәтмәләр индерелде. Уларға ярашлы, тауарҙар һәм хеҙмәт күрһәтеүҙе рекламалау талаптары ҡәтғиләштерелә. Был һыра рекламаһына ла ҡағыла. Белеүегеҙсә, яңы законға ярашлы, һыра башҡа алкоголле эсемлектәргә тиңләштерелә.**

Быға саҡлы һыраны зәңгәр экрандарҙа киске ундан һуң рекламаларға була ине, яңы закон хәҙер быны тыйҙы. Тәмәке тартыу, алкоголле эсемлек эсеү, барлыҡ иҫерткес-илерткестәрҙе ҡулланыу теләге тыуҙырған тауарҙарҙы йәки хеҙмәт төрҙәрен рекламалау зәңгәр экрандарҙан, гәзит биттәренән, урамдарҙағы алтаҡталарҙан алынырға тейеш. Реклама материалдарында көс ҡулланыуҙы сағылдырған, уны аҡлаған, ғаилә ҡиммәттәрен боҙоуға саҡырған, һүгенеү һүҙҙәре булған күренештәр ҙә булмаясаҡ.

VIII "Ҡала мөхите" социаль реклама фестивален ойоштороу комитеты эштәр ҡабул иткәндә ошо Закон талаптарына төп иғтибар йүнәлтәсәк. Уның быйылғы девизы - "Беҙгә ҡушыл!" Ойоштороусылар шулай тип өндәшеп, барлыҡ битараф булмаған ижадсыларҙы фестивалдә ҡатнашырға саҡыра. Фестивалдә, йылдағыса, Рәсәйҙең реклама өлкәһендәге билдәле белгестәре ҡатнашасаҡ, оҫталыҡ дәрестәре үткәрәсәк. Эштәр 1 ноябргә тиклем ҡабул ителә. Фестивалдең ойоштороу комитетының телефоны: (347) 291-11-93 (94, 95).

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## Фалиж (паралич) һуҡһа

❖ Лавр япрағынан яһалған май менән ҡул-аяҡтарҙы ышҡыу файҙалы. 30-40 грамм япраҡтан яһалған порошокты 1 стакан үҫемлек майы менән 1-2 көн буйы ҡайнар духовкала төнәтәһең.

❖ Мускулдар тартышҡанда, фалиждан, эпилепсиянан ҡәҙимге тәмәке япрағы төнәтмәһе шифалы. 0,5 грамм япраҡты 1 стакан ҡайнап сыҡҡан һыуға һалырға, 1 сәғәт төнәтергә һәм көнөнә 2-3 мәртәбә ашар алдынан 1-әр генә десерт ҡалағы эсергә. Бал ҡушырға ла була. Эсеү күләме фәҡәт десерт ҡалағы ғына.

## Организмды таҙартыу өсөн

Бында беҙгә ҡоростамыр (стальник) ярҙам итә ала. 20-30 грамм тамырҙы 1 литр һыуҙа өстән бер өлөшө ҡалғансы ҡайнатырға, һөҙөргә һәм ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

## Ауыҙ боҙолһа

❖ 1 ҡалаҡ ваҡланған имән ҡайырыһына 1 стакан һыу ҡайнатып ҡойорға һәм әкрен утта 15 минут ҡайнатырға. Һыуынғас, һөҙөргә һәм көн дауамында ауыҙҙы сайҡатырға.

❖ Имән ҡайырыһынан яһалған төнәтмә шулай уҡ эс китеүҙе лә баҫа.

❖ Ҡырҡылған, бешкән, шешкән урындарға һөртөү ҙә файҙа бирә.

## Катарактанан дауа

Сир башланған мәлдә балғалаҡтың өстән бер өлөшө күләмендәге балды стакандың өстән ике өлөшө күләмендәге ҡайнаған йылы һыуҙа иретергә, иртәле-кисле күҙҙәргә тамыҙырға.

## Тамырҙар киңәйгәндә

350 грамм бал һәм 250 грамм ҡырылған һарымһаҡты бер аҙна төнәтеп, көнөнә 3 мәртәбә ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Дауа бер нисә ай дауам итә.

Яралар булмаһа ла, тамырҙар төйөнләнеп торған урынға 3-4 сәғәт һайын сей помидор киҫәктәрен бәйләп тоторға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Был сифаттар миңә ҡандан бирелгән булып сыға, артабан улар тик камиллашҡан ғына. Һығымта шундай: тәрбиәнең башы - ата-әсә яуаплылығында, халыҡсанлығы - ғаиләлә үҙләштерелгән ғөрөф-ғәҙәттәрҙә.*



*УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА*

# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ



## Дүртенсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Мөхәммәт бәйғәмбәр йәшәгән осорҙа Ғәрәбстанда тарҡаулыҡ, әҙәпһеҙлек көслө була. Был хәл буласаҡ бәйғәмбәрҙе тәрән уйға һала. Уға Ябраил килә. Ябраил - изге фәрештә, ул саф күңелле кешегә генә килә. Ябраил Мөхәммәттән алда йәшәгән Муса бәйғәмбәргә лә килгән.

Мөхәммәт бәйғәмбәр - исламға нигеҙ һалыусы. Тик ғәрәптәр тәүҙә Мөхәммәттең тәғлиматен аңламайҙар. Шулай итеп, илаһтарға табыныусылар - ҡөрәйштәр тип, ә ислам динен ҡабул итеүселәр мосолман тип атала башлай. Мосолмандар бер генә Аллаға ышана. Ошо урында мәжүсилек менән ислам диненең айырмаһын ныҡлап аңлатып китеү яҡшы булыр.

Дәфтәргә "Бисми-лләһи-рәхмәни-ррәхим" тигәндең тәржемәһен яҙып ҡуйырға кәрәк: "Рәхмәтле һәм рәхимле Алла исеме менән". Мосолмандар ниндәй генә эшкә тотонһа ла, юлға сыҡһа ла бисмиллаһыҙ сыҡмай. Был хаҡта һөйләгәс, уҡыусыларҙың үҙҙәренән әле йәшәгән төйәктәрендә ниндәй тәртипһеҙлек күреүҙәре (эскелек, тәмәке тартыу, тәбиғәтте бысратыу, урмандарҙы сүпләү, йылға-күлдәргә шешәләр ырғытыу, йылғаға төшөп машиналар йыуыу һ.б.) тураһында һөйләтегеҙ. Ошондай етешһеҙлек, тәртипһеҙлек ҡайҙан килеп сыға? Беҙ бит барыбыҙ ҙа мәктәптә уҡыйбыҙ, белем алабыҙ, фәҡәт яҡшы булырға ғына өйрәнәбеҙ, беҙҙең киләсәгебеҙҙе кем хәстәрләр - үҙебеҙ түгелме, тигән һөйләшеү алып барырға кәрәк.

## Дүртенсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Тәүге диндәр тураһында аңлатҡан саҡта, уҡыусыларҙың быға са белгән мәғлүмәттәренә таяныу яҡшы. Әлбиттә, бөтөн халыҡтар ҙа бер төрлө генә уйламаған, бер юлы ғына дингә килмәгән. Шуның өсөн дә донъяла төрлө дини йүнәлештәр барлыҡҡа килгән. Хатта бер үк илдә, мәҫәлән, беҙҙең илебеҙҙә мәжүсиҙәр тип аталған бер үк дини йүнәлештәгә халыҡтарҙың, әйтәйек, башҡорттарҙың, мариҙарҙың, мордваларҙың, удмурттарҙың, сыуаштарҙың да ҡуҙаллауҙары төрлө булған. Мариҙар иң юғары алла тип ҡояш алла тип ҡояш менән яҡтылыҡты атаһа, мордвалар алалар һаны етмеш етегә еткән. Удмурттарҙа - ҡырҡтан ашыу, сыуаштарҙа ла улар байтаҡ. Башҡорттарҙа ун ике әйә һәм ун өсөнсөһө - Тәңре.

Алланың берлегенә ышаныусы иң тәүге халыҡ - йәһүдтәр. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тәғлимате лә Алланың берлеген раҫлауҙан ғибәрәт. Уҡыусылар бәйғәмбәр исемдәренең бөтөн диндәр өсөн дә уртаҡ булыуын, тик исламда уларҙың тәржемә ителеүен белергә тейеш: Адам - Әҙәм, Авраам - Ибраһим, Моисей - Муса, Иисус - Ғайса . Иисус-Ғайсаның әсәһе - Мария-Мәрйәм. Йәһүд дине тураһында һөйләгәндә, Израиль һәм Палестина карталарын ҡулланырға кәрәк. Йәһүдтәрҙең Нәҙер ителгән иле, Йәрүсәлим ҡалаһындағы ғибәҙәтханаһы хаҡында һөйләгәндә, ни өсөн әлеге көнгәсә был ерҙәрҙә туҡтауһыҙ һуғыш барыуын уҡыусылар аңлар. Палестина халҡы менән туҡтауһыҙ бәрелештәр барған Газа секторы /баш ҡалаһы Газа/ йәһүдтәрҙең боронғо Нәҙер ителгән ерендә урынлашҡан. Ә был сектор хәҙерге көндә Палестинаға ҡарай.

## Дүртенсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

"Урал батыр" эпосында төп фекер Яҡшы кеше булып йәшәү, үҙеңдән һуң яҡшы исем ҡалдырыу тураһында бара. Ә кем, ниндәй ул Яҡшы кеше? Ил халҡын хәстәрләгән, дошман ябырылһа - илен ҡурсалаған, халыҡ мохтажлыҡ кисергән нәмәне /эпоста һыу/ үҙ ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып булһа ла тапҡан, етем-есерҙе баҡҡан, ололарҙы олоЛай, кеселәрҙе ҡурсалай белгән кеше ул Яҡшы кеше. Мәктәптәрҙә, ғаиләлә, йәмғиәттә, өйҙә алып барылған тәрбиә эштәре ошо маҡсатҡа йүнәлтелгән. Уға нисек, ниндәй юлдар менән өлгәшергә мөмкин? Нимә яҡшы, нимә насар был донъяла? Кешелә ниндәй сифаттар маҡталала, ниндәйҙәре ғәйепләнә? Әхлаҡ үҙенсәлектәре, әхлаҡ нормалары ошондай һорауҙарға яуаптарҙан тора ла инде. Кеше әҙәпле, тәрбиәле булып тыумай. Ул ғүмер буйы тәрбиәләнә. Әммә ҡайһы бер кешеләр тыштан ғына ялтырап, эстән ҡалтырап йәшәй. Дини тәрбиә бындай кешеләрҙең үҙ язаһын аласағын аңғарта. Яҡшылыҡҡа - яҡшылыҡ, яуызлыҡҡа - яуызлыҡ ҡайта, "теге" донъяла ожмах һәм тамуҡ бар, тигән фекер ята дини тәғлиматта. Ә дини булмаған тәғлиматтә - донъяуи әхлаҡ нормаларында - кеше иң элек үҙ намыҫы алдында таҙа, саф булырға тейеш, тигән һабаҡ бирелә. Ошо уҡ фекер мең йылдар элек ижад ителгән "Урал батыр" эпосында былай тип әйтелгән:

*Утта ла янмаҫ яҡшылыҡ,*
*Һыуҙа ла батмаҫ яҡшылыҡ,*
*Телдән дә төшмәҫ яҡшылыҡ,*
*Бары эшкә баш булыр,*
*Үҙеңә лә, кешегә*
*Мәңге йәшәр аш булыр.*

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**
**(Дауамы бар).**

*ЙӘНӘШӘЛӘ ШУНДАЙ КЕШЕЛӘР!*

# УНЫҢ ИСЕМЕ - УҠЫТЫУСЫ

**Уҡытыусылыҡ - һөнәр генә түгел, ул тотош яҙмыш, күңел торошо ла. Үҙ һөнәренә шундай мөнәсәбәтле, Уҡытыусы исемле был ҡатын Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө һанлы гимназияһында Башҡортостан мәҙәниәте дәрестәрен уҡытҡан Рәшиҙә Хәй ҡыҙы Ғизәтуллина булыр. Гәзит уҡыусыларға уның ҡайһы бер фекерҙәрен еткереп, Уҡытыусы портретының ҡайһы бер һыҙаттарын ғына күҙ алдына баҫтырмаҡсы булдыҡ.**



## Нисек башланды?

Нәҫелебеҙҙә минән алдағы быуында уҡытыусылар юҡ. Бөрйәндең ул замандарҙағы юлһыҙ, яҡтыһыҙ көн күргән төпкөл ауылдарында (ауылдарында, тим, был атайыбыҙҙың, партия ҡушыуы буйынса, ауылдан-ауылға күсеп, етәксе вазифалар башҡарыуына бәйле) тыуып үҫтем. Ул заманда ауылда һауынсы, һатыусы һәм уҡытыусынан башҡа һөнәр барлығын да белмәй инек әле. Иҫ белгәнемдән алып мине мәктәпкә ебәрмәй зарыҡтырыуҙарын хәтерләйем: тәүҙә минән ике йәшкә олораҡ бер туған апайым уҡырға төшкәндә яндым. Бергә уйнап үҫкән ҡыҙҙар ҙа минән бер йәшкә олораҡ булып сыҡтылар һәм уларҙы мәктәпкә шулай уҡ илай-илай оҙаттым. Ул саҡта йылдар ҙа бик оҙаҡ үтә ине бит! Шуға күрә мәктәпкә барғы килеү теләге шул тиклем ҡаныма һеңеп ҡалған. Тегеү оҫтаһы әсәйебеҙ килештереп теккән мәктәп формаһын кейеп, беренсе класҡа уҡырға төшкәндә кисергән ғорурлыҡ тойғоһо һаман онотолмай. Шул йылда ғына мәктәпкә эшкә килгән фәрештәгә тиң матур, йәш апай (Ғарипова Бикә Закировна ине ул) минең уҡытыусым булды. Бөтөн йәнем менән ярattым уны! Былар барыһы ла минең эске донъямда баласаҡ кисерештәре булып ҡалды. Башҡа мөхиттә булып ҡарамағас, башҡалар менән сағыштырыр өсөн фильмдар, мультфильмдар ҡарау түгел, балалар әҙәбиәтенә лә ҡытлыҡ заманында үҫкәс, донъяны нисек бар, шулай ҡабул итеп, бер ниндәй сит тәьҫиргә бирелмәй, тәбиғи үҫеш кисергәнбеҙ ул быуын балалары. Ошоларҙан сығып дөйөмләштерһәк, башланғыс синыф уҡытыусыһы һөнәрен һайлауҙа баяғы тәүге уҡытыусыма булған тоғро яратыу этәргес көс булһа, мәктәп - үҫешемдә тәьмин иткән берҙән-бер изге урын булғанға күрә, шунан башҡаһы күңелдә арбамағандыр инде...

## Атай-әсәйҙән килә

Ҡанда, рухта булғанды ғына тәбиғи рәүештә балаға биреп була. Был яҡтан мин үҙемде ата-әсәмә бурыслы тоям. Телевизор булмағанға күрә, атайыбыҙ бөтә башҡорт баҫмаларын алдырҙы, уларҙың һәр һанын уҡып барыуыбыҙҙы ла күҙ уңынан ысҡындырманы. Уҡығаныбыҙҙы тикшереп өсөн һорауҙар бирепт, фекеребеҙҙе әйтергә лә хоҡуҡ бирҙе. Район үҙәгенәме, Өфөгәме юлы төшкән һайын, һәммәбеҙгә тәғәйенләп алып ҡайтҡан бүләктәре, донъяуи кәрәк-яраҡтары араһында яңы ғына сыҡҡан әҙәби китаптар ҙа даими хәл-ваҡиға ине. Ошо замандарҙа Зәйнәб Биишеваның трилогияһын, Һәҙиә Дәүләтшинаның повестарын әсәйебеҙгә сиратлап ҡысҡырып уҡыйбыҙ. Ауылда бөтмәҫтөкәнмәҫ көнкүреш эштәренән бушаған арала йөн иләп, күмәк балаға ойоҡ-бейәләй бәйләп өлгөртөргә тырышҡан сағында беҙгә ниндәй файҙалы шөғөл йөкмәткән ул! Аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла ауыл клубында "кина" ҡарап үҫкән дә быуын әле беҙ! Русса белмәһәк тә, һүрәтенә ҡарап, йөкмәткеһен "ныҡ төшөнөп" ҡайтабыҙ ҙа, атай менән әсәйебеҙгә кемуҙарҙан түкмәй-сәсмәй һөйләп бирәбеҙ. Хәҙерге заман ата-әсәләренең бер бөртөк балаһының һөйләгәнен тыңларға ла йә ваҡыты, йә теләге юҡлығы менән сағыштырһаҡ, бик тә яҡшы ғаилә тәрбиәһе алғанбыҙ, тип уйлайым. Ғаиләбеҙҙең тағы ла бер үҙенсәлекле шөғөлө - ул да булһа, өй эсендә үҙебеҙгә-үҙебеҙ ҡуйған сығыштарыбыҙ. Ағайыбыҙ гармунда уйнай, беҙ - өс ҡыҙ бала сиратлашып йырлайбыҙ. Атай, дәртләнеп, бейеп ала, ҡурайҙа һупалай. Әсәй, баҫалҡылыҡ һаҡлап, сығыш яһауҙа ҡатнашмаһа ла, талапсан тамашасы. Шул уҡ ваҡытта халыҡ йырҙарын бик нескә оҫталыҡ менән башҡарыусы булараҡ, етешмәгән ерҙәребеҙҙе төҙәтешеп ебәреүсе лә... Халыҡсан тәрбиәнең нигеҙе, шулай итеп, атай-әсәйебеҙҙең тәбиғәттәре менән сағыу, һөнәрле, эске мәҙәниәтле булыуынан киләләр. Был сифаттар миңә ҡандан бирелгән булып сыға, артабан улар тик камиллашҡан ғына. Һығымта шундай: тәрбиәнең башы - ата-әсә яуаплылығында, халыҡсанлығы - ғаиләлә үҙләштерелгән ғөрөф-ғәҙәттәрҙә.

## Мәктәпкә генә яраҡлымын

Мәктәптә балалар менән генә эшләп, саф, алсаҡ мөнәсәбәттәргә көйләнгәс, һаһалмалыҡ, хәйләкәрлек, уҫаллыҡ сифаттарын талап иткән йәмғиәткә яраҡлашыу бик ҡыйын миңә. Тормошта, ысынбарлыҡта, кешеләр менән формаль мөнәсәбәттәрҙә ошо ябайлығым, берҡатлылығым менән ыйыш ғына отолғаным да бар, ләкин барыбер икенсе төрлө була белмәйем. Донъя бигерәк ҡатмарлы бит, ябайлығым, миллилегем, тәбиғилегем, шулай итеп, мәктәпкә генә яраҡлылыр, тигән фекергә лә килгеләйем... Был һис кенә лә төшөнкөлөккә бирелеү түгел, әлбиттә. Киреһенсә, киләсәккә бик ыңғай фекерҙәмен, үҙемде тапҡанмын, үҙ-үҙемә баһа биреү кимәленә еткәнмен. Йәмғиәттә "гәзәл баһа алыу" сире менән ауырымайым, уға ҡарата ла ҡарашым етлеккән. Абруйға килгәндә инде, Аллаға шөкөр, уҡыусыларымдың күптән үҙаллы булыуына ҡарамаҫтан, һағынып күрешергә килеүе, юлыҡҡанда ата-әсәләренең әлегәсә яҡын кешеләре итеп ҡосаҡлауы, тик яҡшы яҡтан хәтерләүе - ошолар үҙе хеҙмәтемә баһа. Үҙем яратып һайлаған эшемә хыянат итмәй, хилафлыҡ килтермәй ғүмер иткән ябай һөнәрмән булып ҡалдым, бер үк ваҡытта үҙемдән һуң килгән бик күп үҫәрмәндәргә белемемде, булған оҫталығымды, тәжрибәмде тапшыра алдым. Улар алдында намыҫым таҙа икән, тимәк, күңелем һәм рухым күтәренке, шатмын, бәхетлемен...

**Рита ФӘТҠУЛЛИНА**
**әҙерләне.**

✓ Үрҙә атап үтелгән "Хаквара" ҡалаһы Һаҡмар тигән башҡорт йылғаһын иҫкә төшөрә. Был Һаҡмар атамаһының "вар" өлөшө ваҡыт үткәс "мар"ға әйләнгән булыуы бик тә ихтимал.



ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

**Башҡортостан Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, философия фәндәре кандидаты Зәкирйән ӘМИНЕВ менән башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларының эҙенән сәйәхәтебеҙҙе дауам итәбеҙ.**

# МОЛДОВА БАШҠОРТТАРЫ



## Топонимдар тарих һөйләй…

Яҙма сығанаҡтарҙан тыш, Үҙәк Европала башҡорттарҙың ата-бабаларының булғанлығын ер-һыу атамалары ла раҫлай. Әлегә улар ныҡлап өйрәнелмәгән. Улар бигерәк тә тарихи Венгрия территорияһында күп. Атап әйткәндә, венгрҙар йәшәгән Трансильванияла (хәҙерге Румыния) Temes тип аталған йылға аға. Уның ярында Temesvar тигән боронғо мадьяр ҡалаһы урынлашҡан. Temesvar топонимы ике өлөштән тора: Temes+var. "Var/вар" венгр теленән тәржемә иткәндә "ҡала" тигәнде аңлата. Йәғни, Temesvar "Темес ҡалаһы" тип тәржемә ителә башҡортсаға.

Башҡортостандың Баймаҡ районында Темәс тип аталған ҙур башҡорт ауылы тураһында ишетмәгән кеше, моғайын, юҡтыр. Сөнки был ауыл Башҡортостан автономияһы төҙөлгәс, башҡорт иленең тәүге мәркәзе була. Мадъярҙың Temes ҡалаһы уларҙың телендә беҙҙең башҡорттоң Темәсе кеүек үк әйтелә һәм шулай яңғырай. Минеңсә, венгрҙарҙың "Temes"е - ҡасандыр венгрҙар менән бергә йәшәгән, һуңынан күп һанлы мадъярҙар араһында һеңгән боронғо башҡорттарҙың беҙҙең көндәргәсә килеп еткән ауазы ул. Темәстең мәғәнәһенә килгәндә, ул этноним, йәғни боронғо башҡорт ырыуының атамаһы булырға тейеш кеүек. Хәҙерге үзбәктәрҙең Ҡатаған ырыуының бер бүлкәте Темәс тип атала. Үзбәкстандың Хорезм яҡтарының бәшәнәктәр менән бәйле икәнен иҫкә төшөрһәк, Ҡатаған ырыуындағы Темәстең беҙҙең башҡортҡа мотлаҡ ҡыҫылышы барҙыр, тип әйтергә урын ҡала. Бер таныш үзбәк этнографының әйтеүенә ҡарағанда, Хорезмда күптән инде үзбәкләшеп бөткән башҡорттар әле лә йәшәй икән һәм был турала хатта ер-һыуҙың паспорты булған топонимия ла иҫбатлап, ҡысҡырып тора. Боронғо Хорезм ерендә, үзбәктән тыш, башҡорттарға туранан-тура мөнәсәбәтле ҡарағалпаҡ халҡы көн итә. Был халыҡтың килеп сығышын ғалимдар бәшәнәктәр менән бәйләй. Ошоларҙы иҫтә тотоп, Трансильваниялағы Темәстең башҡорттарға, һис шикһеҙ, мөнәсәбәте бар, тип уйлайым.

IX быуатта Паннонияны яулап алған Забола исемле "хак" (chak) тип аталған ҡәбиләнең юлбашсыһы ҡәлғә төҙөп, уны Һаквара (Chakwara) тип атай. Рим папаһы Евгений Икенсенең буллаларында 826-сы йылдарҙан башлап "Ветвара" ҡалаһы (Vetwar, Vetuar формаларында) телгә алына. Билдәле тарихсы С. П. Толстов "вар" (war) һүҙен һәм уға бәйле Паннониялағы топонимик терминдарҙы, шул иҫәптән яңы мадъяр телендәге "варош" (varos) һүҙен дә һунндар менән бәйләү яғында. Был "вар" һүҙе тәүҙәрәк ҡәлғәләрҙе ураткан тәрән соҡорҙо аңлатҡан. Был һүҙ боронғо иран телдәрендә лә теркәлгән. "Тәрән соҡор" мәғәнәһендә был һүҙҙең "вур" вариантьі сыуаштарҙа, ә "ур" тигәне үҙе-беҙҙең башҡорт телендә әле булһа йәшәүен дауам итә. Урал аръяғында этнографик экспедицияларҙа йөрөгәндә боронғо башҡорт ауылдарын уратҡан урҙарҙы үҙемә бынан бер нисә йыл элек кенә күрергә насип булды. Башҡорт телендә "ур һалыу" тиҙәр. Тимәк, мадъярҙарға был "вар", "варош" һүҙе сыуаш теле тибында һөйләшкән төркиҙәрҙән килеп ингән. Ҡәлғә-ҡалаларҙы уратҡан "вар" ("вур", "ур") әкренләп кенә "соҡор" мәғәнәһенән "ҡала" тигән мәғәнәне алған. Сөнки һуғыш-ҡыйралыштар менән тулы ул тынғыһыҙ дәүерҙәрҙә ҡала урһыҙ булмаған.

Үрҙә атап үтелгән "Хаквара" ҡалаһы Һаҡмар тигән башҡорт йылғаһын иҫкә төшөрә. Был Һаҡмар атамаһының "вар" өлөшө ваҡыт үткәс "мар"ға әйләнгән булыуы бик тә ихтимал. Бөрйән ырыуы вәкилдәре йәшәгән Беренсе Этҡол тигән башҡорт ауылы аша ағып Һаҡмарға ҡойған "Ҡышлауар" (ҡышлау+вар, йәғни мал тотҡан башҡорттарҙың ҡышлау урыны) тигән йылғаның атамаһындағы "вар", "уар" һүҙе быға бер дәлилдер. Ике осраҡта ла (Һаҡ+вар, Ҡышлау+вар) "вар", "уар" һүҙе барлығын күрергә була.

Тарихи Башҡортостан сиктәрендә составында "вар/уар" һүҙе булған Һаҡмар, Ҡышлауарҙан тыш, Варяж, Варяш, Вәрәшле, Уваряж, Ыуараш, Ыуара, Ыурынды, Кәркәуар һ.б. шундай йылға, һыу менән бәйле атамалар бар. Был гидронимдарҙы беҙҙең башҡорт ғалимдары Көньяҡ Уралда мадъярҙарҙың ата-бабалары ҡалдырған эҙҙәр, тип иҫәпләй. Быға дәлил итеп, мадъяр телендә "варош" ("ҡала") һүҙенең булыуын килтерәләр. Был авторҙар мадъяр телендәге "варош" һүҙенең уларға (С. П. Толстов билдәләүенсә) төрки телдәрҙән килеп ингән булыуын оноталар. Билдәле булыуынса, борон төрки халыҡтары, шул иҫәптән төрки халыҡтары составында булған мадъярҙарҙың ата-бабалары үҙҙәренең тороу урынын, аҙаҡ инде ауылдарын, ҡала-ҡәлғәләрен урҙар (соҡорҙар) менән уратып алған. Уларҙы төркиҙәр "вар/вур/ур" тип атаған. Венгр теленең "вар/варош" һүҙенә фонетик яҡтан яҡын вариант хәҙерге сыуаш телендә "вур" формаһы һаҡланған. Венгрҙар һуңынан "вар/варош" һүҙе менән "ҡала" атамаһын, йәғни "вар" - соҡор менән уратылған урын, тип билдәләй башлаған.

Шуға күрә башҡорт ерҙәрендә осраған Варяж, Варяш, Вәрәшле, Уваряж, Ыуараш, Ыуара, Ыурынды, Кәркәуар, Ҡышауалар һәм ошоға оҡшаш, нигеҙендә урыҫса "ров", "рытвина", "овраг", "долина" тигән мәғәнәләге "вар/уар" тамырлы фонетик варианттарҙы, мадъяр һүҙе, тип әйтергә бер ниндәй нигеҙ юҡ. Уларҙың килеп сығышы төрки (боронғо башҡорт) теле аша аңлатыла.

Үҙ атамаһында "вар/уар" һүҙе булған атап үтелгән гидронимдар тәүҙә "йылға, соҡор-саҡыр, соҡор", йәғни һыу менән бәйле тәбиғәт объекттары булыуы тураһында боронғо ваҡыттарҙан алып мәғлүмәттәр һаҡланып ҡалған. Мәҫәлән, һунндар Днепрҙы "вар", йәғи "йылға" тип атаған. Бер нисә быуат үткәс, төрки телле бәшәнәктәрҙең дә Днепрҙы "Варух" тип атағанлығы билдәле. Был ике сораҡта ла "вар" тамырын күрмәү мөмкин түгел.

Беҙҙең башҡорт ерҙәрендәге Варыш, Ыуараш, Вәрәш, Вәрәшле, Ыуара һәм башҡалар - бөтәһе лә һыу менән бәйле атамалар. Был һыуҙар буйында ҡалалар юҡ. Археологтар ҙа ул тирәләрҙә ҡала кеүек нәмәләр тапҡаны юҡ. Был турала археологтарыбыҙҙың бөтә хеҙмәттәре менән дә танышып барған кеше буларак әйтә алам. Әгәр беҙҙәге бөтә бая атап киткән Уараш, Ыуараш һ.б. шундай урындар һыу (йылғалар, күлдәр) менән бәйле икән, нисек уларҙы мадъяр теленән "ҡала" тип аңлатырға була икән? Ярар, ниндәйҙер һыу буйында ҡала булған икән, ти. Ул ҡалала мадъярҙарҙың ата-бабалары йәшәгән, тип тә ризалашайыҡ. Ул ерҙәргә башҡорттоң ата-бабалары килеп сыҡҡас, ҡала халҡынан, йәғни мадъярҙарҙан ҡаланың атамаһын һораһалар, яуапҡа мадъярҙар ҡаланың атамаһын әйтергә тейештәр, мәҫәлән, Өфө тип, йәки һорауҙы яңылыш аңлаһалар, ҡала ултырған йылғаның атамаһын әйтергә тейештәр, ә бер нисек тә "ҡала" (варош) тип түгел. Ҡаланың "ҡала" икәнен килгән кеше үҙе лә күрәсәк һәм иң тәүҙә уның йәиһә ҡала янынан аҡҡан йылғаның атамаһын һораясаҡ. Ярар, һыу буйында ултырған берәй ҡаланы башҡорттар, мадъярҙарҙы яңылыш аңлап, Варош тип атанылар ҙа ти. Тик был осраҡта ул ҡала беҙҙең телебеҙҙә Варош ҡалаһы булыр ине. Әммә беҙҙә ундай ҡалалар юҡ. Тик ундай һыу менән бәйле топонимдар ғына бар. Тимәк, беҙҙең Варыш, Вараж, Ыуараш, Ыуары, Ыуранды һәм шундайҙар йылға, йырын тигәнде аңлата. Хәҙерге төрөк телендә йылға "ырмаҡ" була. Бында ла шул уҡ "вар, йырыу, йырғыслау, ырыу, соҡоу" мәғәнәһен күрергә була.

**(Дауамы бар).**

---

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# 1812 ЙЫЛҒЫ ВАТАН ҺУҒЫШЫНЫҢ... орден кавалерҙары

**Хөсәйен Күсәрбаев** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Есаул. Ырымбур губернаһының Ырымбур өйәҙе Үҫәргән олоҫо Бикбирҙе ауылынан. 1-се Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Голландия һәм Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. 1813 йылда Данциг блокадаһында айырылып тора. 4-се дәрәжә Изге Анна ордены (1813), "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Аҡсулпанов Аралбай Күсәрбай улы** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Ғәскәр старшинаһы. Ырымбур губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Телтим-Юрматы олоҫонан Аҡсулпан ауылынан (хәҙерге Стәрлетамаҡ районының Күсәрбай ауылы). Аҡсулпановтарҙың дворян тоҡомонан. 2-се Башҡорт полкы составында 1812 йылда Кобринды алыуҙа ҡатнаша. 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены (1812), "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Әйүп Ҡәйепов** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Старшина. Ырымбур губернаһы Бәләбәй өйәҙе Яйыҡ-Суб-Мең олоҫонан Сәпәш ауылынан (хәҙерге Әлшәй районының Иҫке Сәпәш ауылы). 1792 йылдан линия хеҙмәтендә рядовой, 1804 йылдан - зауряд-йөҙ башы, 1805 йылдан - дистанция башлығы. Подпоручик Әйүп Ҡәйепов 2-се Башҡорт полкы составында 1812 йылда Кобринды алыуҙа ҡатнаша (1826 йылда вазифаһынан алына, 1833 йылда хеҙмәттән азат ителә). 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены (1812), "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған. 4-се Башҡорт атлы полкы Ырымбур губернаторы Г. С. Волконскийҙың 1812 йылдың 25 июнендәге бойороғона ярашлы, Ырымбур губернаһының Силәбе өйәҙе ауылдарында 4-се, 5-се, 6-сы (Өфө өйәҙе) кантондары башҡорттарынан ойошторола. 1813 йылда Дрезден өсөн алышта ҡатнаша, 1814 йылдың 18 мартында Парижға инә.

**Аҫылғужа Бакиров** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Поход старшинаһы. Ырымбур губернаһы Өфө өйәҙенең этник ҡатнаш Ҡаракөсөк ауылынан (хәҙерге Дүртөйлө районының Үрнәк ауылы). 4-се Башҡорт полкы составында Полоцк ҡалаһы, Березина йылғаһы (Днепр йылғаһы ҡушылдығы), 1813 йылда Дрезден өсөн алышта ҡатнаша һ.б. 1812 йылдың авгусында - 1814 йылдың декабрендә - полк командиры ярҙамсыһы. 1813 йылдың 27 декабрендә корпус командующийы, кавалерия генералы граф П. Х. Витгенштейндың А. Бакировты орден менән наградлау тураһындағы бойороғонда: "Император ғәли йәнәптәре һәм уның миңә биргән власы исеменән һеҙҙең 10 августа һәм 6 сентябрҙә, минең конвойымда төрлө урындарға бер нисә тапҡыр ебәрелеп, ҡушылғанды фиҙаҡәр үтәүегеҙ, күрһәткән ҡаһарманлығығыҙға ғәҙел ихтирам күрһәтәм..." - тиелә. Һуғыштан һуң 12-се башҡорт кантонының йорт старшинаһы булып хеҙмәт итә. 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены (1813) менән наградланған.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**

**(Дауамы бар).**

**11 октябрь Башҡортостанда Республика көнө тип билдәләнә. 1990 йылдың 11 октябрендә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителгәс, беҙ был көндө Суверенитет көнө булараҡ байрам итә торғайнык. Бөгөн иһә ул Республика көнө тип атала. Ошо байрам, ғөмүмән, Рәсәйҙә алып барылған милли сәйәсәт, милли суверенитет, дәүләт суверенитеты һәм башҡа мәсьәләләр хаҡындағы әңгәмәлә сәйәсәт фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы вице-президенты Мансур Әнүәр улы ӘЮПОВ менән сәйәсәт фәндәре кандидаты Әхтәр Мөхәммәт улы БОҪҠОНОВ ҡатнаша.**

▸ **Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитетын иғлан иткән көндөн һуңғы йылдарҙа Республика көнө тип атала башлауын нисек аңлатыр инегеҙ? Уны суверенитеттың юҡҡа сығыуы тип тә аңлап буламы?**

**Ә. БОҪҠОНОВ:** Үткән быуаттың 90-сы йылдарындағы суверенитет өсөн көрәш алып барған милли хәрәкәт илебеҙҙә барған сәйәси процестарҙың бер сағылышы булды. Суверенитет хәрәкәтенән алдараҡ экология буйынса хәрәкәттәр ҙә булып алды. Ә инде суверенитет формаһы, талап булараҡ, аҙағыраҡ барлыҡҡа килде. Был талап һуңынан Декларацияла, 1992-1994 йылдарҙа Үҙәк менән килешеүҙә һәм республиканың 1993 йылғы Конституцияһында сағылыш тапты. Хәҙерге ваҡытта Конституцияла суверенитет термины булмаһа ла, дәүләтселек мәғәнәһе һаҡланды. Мәҫәлән, РФ Конституцияһының 5-се, 68-се статьяларында Рәсәй субъекттары республика тип күрһәтелә. Ә республика ул дәүләтселек формаһын аңлата. Башҡортостандың ғәмәлдәге Конституцияһы преамбулаһында XVI быуаттағы килешеүҙәр, 1919 йылдағы автономия яулауҙар иҫәпкә алынған фекер әйтелә. Шуға күрә бөгөн суверенитетты бөтөнләй онотоорға тырышыу иртәрәк. Был мөмкин дә түгел, сөнки ул ысынбарлыҡ. Әгәр ҙә бөгөн Рәсәй Федерацияһының ҡайһы бер даирәләре суверенитет тигән һүҙҙе онотторорға тырышһа ла, быны беҙҙән аңдан алып ташлау мөмкин түгел.

Суверенитет тигәндә, беҙ бөгөн республикабыҙҙың дәүләтселеге тураһында һүҙ алып барабыҙ. Халҡыбыҙҙы туплаусы идея булараҡ, административ-территориаль форма булараҡ, беҙҙең дәүләтселегебеҙ бар, беҙ уның сикләнгәнлеген дә аңлайбыҙ. Шуға күрә суверенитет тигән һүҙҙән ҡурҡырға ла ярамай. 1917 йылдарҙағы Башҡорт милли хәрәкәте етәкселәре автономия яулаған саҡта суверенитет һүҙен 90-сы йылдарҙағы һымаҡ ҡулланмаған. Шул уҡ ваҡытта ул осорҙағы документтарҙы ҡараһаҡ, унда дәүләтселек идеялары ярылып ята. Замандың сәйәси ситуацияһына ҡарап, беҙ бөгөн дәүләтселегебеҙ формаһын шуға яраҡлаштырып эш итергә тейешбеҙ.

**М. ӘЮПОВ:** Рәсәй кимәлендә лә тәүҙә "Рәсәйҙең бойондороҡһоҙлоҡ көнө" тигән терминды индереп ҡаранылар. Шунда уҡ һорау тыуҙы: Рәсәй кемдән бойондороҡһоҙ булырға тейеш һуң? Яуабы юҡ. Аҙаҡ Рәсәй көнө тигән төшөнсә барлыҡҡа килде. Шуға ла беҙ 11 октябрҙә Суверенитет көнө тип атаһаҡ, фәнни төшөнсәгә әйләнә, күп һорауҙар тыуа, ә Республика көнө, тиһәк, барыһы ла үҙ урынына ултыра. Был тарихи күренеш башҡорт халҡының тарихында йәки үҙаңында дәүләтселек менән бәйле булып ҡаласаҡ. Дамир Вәлиевтың "Милли суверенитет һәм милли яңырыу "тигән хеҙмәте бар. Унда ғалим милли суверенитеттың дәүләт суверенитетынан ни яғы менән айырылыуы хаҡында ла һүҙ алып бара. Был хеҙмәттә һәр кемде ҡыҙыҡһындырған күп һорауҙарға яуап бар.

# ҮҘАЛЛЫЛЫҠ –

## үҙең һәм илең өсөн

▸ **Ысынлап та, милли суверенитет менән дәүләт суверенитеты нисек айырыла һуң?**

**Ә. БОҪҠОНОВ:** Совет осоронда уҡ СССР ғалимдары Юнисов менән Тузмөхәмәтовтар үҙҙәренең хеҙмәттәрендә был мәсьәләне күтәргән. Шуны әйтергә кәрәк, суверенитет өс төрлө була: халыҡ суверенитеты, милли суверенитет һәм дәүләт суверенитеты. Милли суверенитет тик бер милләттең генә мәнфәғәтен үҙ эсенә ала. Әйткәндәй, республикабыҙ үҙенең суверенитетын иғлан иткәндә тап ошо мәсьәлә тирәһендә һүҙ ҡуйырҙы һәм мәсьәлә шулай ҡуйылды: беҙгә ниндәй суверенитет кәрәк - халыҡтыҡымы, милләттекеме, дәүләттекеме?

**М. ӘЮПОВ:** 90-сы йылдарҙа Билал Юлдашбаев, башҡорт халҡының үҙ милли суверенитетын иғлан итерлек потенциалы юҡ, тип сығыш яһаны. Ул был дәғүәһен республикала башҡорттарҙың нисбәтенә ҡарап белдерҙе. Тап шуның өсөн дә XX быуат аҙағында 1917 йылдағы кеүек Башҡортостан суверенитетын башҡорт милләте суверенитеты итеп иғлан итә алмай инек. Дамир Жәүәт улы ул саҡта Башҡортостан Республикаһы дәүләт суверенитетын иғлан иткән осраҡта нисек итеп башҡорт милләтенең хоҡуҡтарын һәм мәнфәғәттәрен гарантияларға мөмкин булыуы хаҡында бик фәһемле фекерҙәр әйтте. Дамир Жәүәт улы башҡорт етәксе кадрҙарына квоталар булдырыуҙы һәм урындағы Дәүләт йыйылышында башҡорт халҡы мәнфәғәттәрен яҡлауҙың хоҡуҡи ысулдарын булдырыуҙы тәҡдим итте. Ғалим логик яҡтан хаҡлы булһа ла, был тәҡдимдәр сәйәси-хоҡуҡи яҡтан бер урында ла ҡаралмағайны, шуға күрә тормошҡа ашырылманы.



Шулай итеп, беҙ ул саҡта бик ҡатмарлы хәлдә ҡалдыҡ һәм, әйтергә кәрәк, ул саҡтағы Юғары Совет иң аҡыллы ҡарарҙарға килә алды, тип иҫәпләйем. Беҙ шул мәлдә де-юре, Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитетын иғлан иттек, де-факто, ул ниндәйҙер кимәлдә башҡорт милләтенең милли суверенитеты ла булды. Ошо мәсьәләне хәл итеү өсөн сәғәттәр буйы бәхәс барҙы. Йыйылыш ике яҡҡа бүленде, бер яҡтағылар башҡорт милләтенең үҙбилдәләнешкә хоҡуғын төп документҡа индереүҙе яҡлай, икенселәр быға ҡырҡа ҡаршы сыҡты. Һөҙөмтәлә: "Башҡорт халҡының үҙбилдәләнешкә хоҡуғын бойомға ашырып һәм барлыҡ халыҡтарҙың хоҡуҡтарын гарантиялап..." тигән фекер үтте. Стенографик отчетта был момент нәҡ ошолай теркәлеп ҡалған. Был фекер менән барыһы ла риза булды. Дәүләт суверенитеты иғлан ителгәндән һуң яйлап "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге ҡабул иткән барлыҡ ҡарарҙар ҙа республика кимәлендә бойомға ашырыла башланы. Башҡортостан Республикаһы дәүләт суверенитетының ниндәйҙер кимәлдә башҡорт милләтенең милли суверенитеты булараҡ ҡабул ителеүе республика парламентындағы депутаттарҙың да тарихи зирәклеге хаҡында һөйләй.

▸ **1917 йылдан башланған автономия өсөн көрәштә дәүләтселек нигеҙен башҡорт милләтенең хоҡуҡтарын бойомға ашырыу, милләтте һаҡлау һәм үҫтереү тәшкил иткән. Хәҙерге ысынбарлыҡ шарттарында иһә, маҡсаттар тағы ла киңерәк планда ҡуйыла, маҡсаттар үҙгәрә төшә. Шулай түгелме?**

**Ә. БОҪҠОНОВ:** Теория теория менән, әммә донъя кимәлендәге сәйәси ысынбарлыҡ шунан ғибрәт: бөгөн Америка Ҡушма Штаттары үҙенең сәйәси эшмәкәрлеге менән бойондороҡһоҙ дәүләттәрҙең суверенитетын емерә. Югославияны, Ливияны, Мысырҙы алып ҡарайыҡ. Тимәк, дәүләтселек тураһындағы һүҙ йөрөткәндә сәйәси ысынбарлыҡҡа ҡарап эш итеү хаҡында әйтергә кәрәктер. Әйтәйек, 1917 йылға тиклем Рәсәйҙә ниндәй ҡоролош булғанын күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ. Ул ваҡытта самодержавие, православие һәм народность позицияһы дәүләт сәйәсәте була. Унда гражданлыҡ хоҡуҡтары хаҡында һүҙ алып барыу ҙа мөмкин булмаған. Шуға күрә 1917 йылғы түңкәрелеш барлыҡҡа килгәс, Башҡорт милли хәрәкәте етәкселәре дәүләтселектең төп маҡсатын милләтте бер дәүләткә туплауҙа күрә. 1917 йылда бер-бер артлы уҙған 1-се, 2-се, 3-сө ҡоролтайҙарҙың документтарын ҡараһаҡ, милли хәрәкәт етәкселәренең демократик юлды һайлауы күҙгә ташлана. Ә хәҙерге ваҡытта XXI быуат башында беҙ башҡа илдәрҙең демократик процестарына ҡушылып, хоҡуҡи дәүләт төҙөү принциптарына килергә бурыслыбыҙ. Хәҙер донъяла халыҡ-ара хоҡуҡи нормаларҙың берҙәм стандарттары барлыҡҡа килде, ә йөҙ йыл элек улар юҡ ине.

**М. ӘЮПОВ:** Хәҙерге донъя шарттарында дәүләт үҙенең тәүге билдәләрен, мәғәнәһен юғалта һымаҡ. Бында милләт төшөнсәһе һәм күренеше менән төплө рәүештә шөғөлләнергә кәрәк. Нимә һуң ул хәҙерге милләт һәм дәүләт? Ни өсөн дәүләттә милләт-ара ыҙғыштар ҡуба? Ниндәй дәүләткә хас бындай күренеш? Америка профессоры Роберт Суниҙың "Империялар һәр ваҡыт үҙәктәге революциялар, төбәктәге милләтселек һәм сепаратизм һөҙөмтәһендә юҡҡа сыға" тигән бик үҙенсәлекле фекере бар. Беҙ быны Рәсәй миҫалында 1917 йылда һәм 90-сы йылдарҙа күҙәтәбеҙ. Беҙ 1917 йылдан алып Советтар Союзы емерелеп төшкәнсе Сталиндың милли мәсьәлә хаҡындағы тәғлимәте буйынса йәшәнек. Беҙгә хәҙер уның хеҙмәтен яңынан өйрәнергә һәм заманға яраҡлы өлөштәрен ижади файҙаланырға кәрәктер. Әммә беҙҙә был мәсьәлә буйынса эшләгән белгестәр аҙ.

**Ә. БОҪҠОНОВ:** Улай ғына түгел, беҙҙә милләттең халыҡ-ара хоҡуҡ нормаларын өйрәнгән белгестәр бик аҙ. Шул уҡ 1920 йылдағы дәүләтселек проблемаларын ғалимдар ҙа, студенттар ҙа, юристар ҙа өйрәнеп бармай. Әйтәйек, Мәскәү ғалимы В. Тишков милләт һәм этнос мәсьәләләрен өйрәнә, әммә уның хеҙмәттәре сәйәси маҡсатты күҙ уңында тотоп яҙыла. Ул, ғөмүмән, милләт төшөнсәһен юҡҡа сығарып, тик этностар ғына ҡалдырыу яҡлы.

▸ **Милләт һәм этнос мәсьәләһендәге ике ҡараш тураһында әйттек: марксизм ҡарашы һәм В.Тишков ҡарашы. Хәҡиҡәт уларҙың ҡайһыһында, әйҙә, шуны асыҡлап үтәйек әле?**

**М. ӘЮПОВ:** Марксизм буйынса, милләт- ул дөйөм уртаҡ тарихы һәм территорияһы, мәҙәниәте һәм теле булған кешеләр төркөмө.

***Суверенитет тигәндә, беҙ бөгөн республикабыҙҙың дәүләтселеге тураһында һүҙ алып барабыҙ. Халҡыбыҙҙы туплаусы идея булараҡ, администрация-территориаль форма булараҡ, беҙҙең дәүләтселегебеҙ бар, беҙ уның сикләнгәнлеген дә аңлайбыҙ. Шуға күрә суверенитет тигән һүҙҙән ҡурҡырға ла ярамай. 1917 йылдарҙағы Башҡорт милли хәрәкәте етәкселәре автономия яулаған саҡта суверенитет һүҙен 90-сы йылдарҙағы һымаҡ ҡулланмаған. Шул уҡ ваҡытта ул осорҙағы документтарҙы ҡараһаҡ, унда дәүләтселек идеялары ярылып ята. Замандың сәйәси ситуацияһына ҡарап, беҙ бөгөн дәүләтселегебеҙ формаһын шуға яраҡлаштырып эш итергә тейешбеҙ.***

✓ ***Туған телде иң беренсе нәүбәттә милләт үҙе һаҡларға бурыслы. Әгәр ҙә башҡорт балаһы үҙенең туған телен өйрәнмәй икән, ғаилә был эштән ситтә икән, дәүләт ярҙамы менән генә туған телебеҙҙе һаҡлап булмаясаҡ.***

# ХОҠУҠ ҠЫНА ТҮГЕЛ...
## яуаплылыҡ та

**Ә. БОҪҠОНОВ:** Һеҙ әйткән хеҙмәтендә Сталин инҡар итеү ысулы буйынса фекер йөрөтә. "Әйҙә, милләттең телен алып ташлайыҡ, ул осраҡта милләт төшөнсәһе лә юҡҡа сыға", ти ул. Башҡа мәсьәләләргә лә шулай ҡарай ул. Ошондай фекерләүе менән ул үҙен милли мәсьәләләр буйынса төп белгес итеп таныта.

**М. ӘЮПОВ:** Хәҙерге сәйәсмәндәр Тишковтың конструктивизмға нигеҙләнгән ҡарашы менән ҡоралланып, шулай уҡ милләтте инҡар итеп маташа. Милләттәр улар бер-береһенән төрлө күрһәткестәре буйынса айырылған реаль кешеләр төркөмө. Ә Бенедикт Андерсен иһә, милләт - ул аң продукты, уны сәйәсмәндәр һәм зыялылар уйлап сығара, тип аңлатырға тырыша. В. Тишков уның һүҙен ҡабатлай.

**Ә. БОҪҠОНОВ:** Минеңсә, ундай ҡараштарҙың заманы үтте хәҙер. Һәр хәлдә, уның идеяһы Рәсәй өсөн түгел. Рәсәйҙә бик күп халыҡтар үҙенең тарихи ерлегендә йәшәй һәм Рәсәйҙе Америкаса бергә уҡмаштырырға тырышыу үтмәйәсәк.

Бенедикт Андерсендың теорияһын юридик, сәйәси, тарихи, хатта ябай логика күҙлегенән дә юҡҡа сығарып була. Тишковтар ҙа беҙҙе милләт булараҡ инҡар итмәксе. Мәҫәлән, кемдәр этнос төркөмөнә ҡарай? Әйтәйек, нуғайбәктәр, ҡасаҡтар (казачество) һ.б. Ә инде халыҡ-ара хоҡуҡ нормалары буйынса этностың үҙбилдәләнешкә йәғни үҙ дәүләтселеген булдырыуға хоҡуғы юҡ. Этносҡа мәҙәни-милли автономия биреү ҙә етә. Әйтәйек, ҡасаҡтар Степан Разиндарын, Емельян Пугачевтарын алға сығарып, бунт яһарға мөмкиндәр, әммә бер ваҡытта ла дәүләтселеккә дәғүә итмәйҙәр. Әгәр ҙә беҙ этнос категорияһы менән килешһәк, үҙбилдәләнешкә хоҡуғыбыҙҙан үҙ теләгебеҙ менән баш тартабыҙ булып сыға.

**М. ӘЮПОВ:** В.Тишков милләт мәсьәләһе менән дәүләт шөғөлләнергә тейеш түгел, тип иҫәпләй, йәғни 1917 йылда динде дәүләттән айырған кеүек, милләтте лә дәүләттән айырырға тырыша. Уныңса фекер йөрөтһәк, бына һин, мәҫәлән, башҡорт булырға теләйһең икән, йәнәһе, теүәтәй кейеп, өйөндә ҡурай уйнап ҡына ултыраһың. Йәғни балаңа туған теленде, сәнғәтеңде, мәҙәниәтеңде уҡытырға теләйһең икән, Финляндиялағы кеүек, йәкшәмбе мәктәбендә үҙ аҡсаңды түләп уҡытаһың...

**Ә. БОҪҠОНОВ:** Мин күҙәтеп барам, хәҙер Рәсәй, бигерәк тә күп урыҫ ғалимдары Тишковтың идеяларын хупламай, һәр хәлдә, уларҙы урап үтергә тырыша, сөнки уның теорияһы урыҫ халҡының да тамырын ҡорота.

▸ **"Суверенитет беҙгә нимә бирҙе?" тигән һорау ҡалыпҡа әүерелеп тә бара. Был осраҡта ҡайһы берәүҙәр: "Суверенитет беҙгә нимә бирҙе?" тип түгел, "Мин суверенитет, республика өсөн нимә эшләнем?" тип әйтеү дөрөҫөрәк булыр", тип тә сығыш яһаны. Ысынлап та, һанай китһәң, беҙгә суверенитет бик күпте бирҙе, бөгөн беҙ ул йылдарҙа өлгәшкәндәрҙең күпселеген юғалтып та өлгөрҙөк. Шулай ҙа, хәҙерге көн күҙлегенән ҡарағанда, нимә бирҙе һуң беҙгә суверенитет? Был йылдар башҡорт милләте өсөн нимәһе менән әһәмиәтле?**

**М. ӘЮПОВ:** Суверенитет иҡтисади һәм сәйәси үҙаллылыҡ шарттарында республикаға, уның халҡына, башҡорт халҡына ҙур бер баҫҡысҡа күтәрелергә мөмкинлек бирҙе. Башҡорт милләтенә уның тарихы, меңәрләгән батыр улдары әйләнеп ҡайтты, милли теле, мәҙәниәте, сәнғәте үҫеште һәм быларҙы башҡорт милләте бер ҡасан да онотмаясаҡ һәм бынан һуң бер ваҡытта ла ошо һуңғы егерме йыл йәшәгәндән түбән кимәлдә йәшәргә риза булмаясаҡ. Милләттең тарихи хәтере уяныуының төп әһәмиәте бына ошонда.

Дәүләт суверенитеты иғлан иткәс, беҙ ике референдум үткәрҙек. Уның һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостан Республикаһының иҡтисади үҙаллылығы һәм Рәсәй Федерацияһы менән килешеү мөнәсәбәте өсөн республиканың 75 процент халҡы ыңғай тауыш бирҙе. 1990 йылдың СССР ҡануниәте буйынса беҙ Союз килешеүенә ҡул ҡуйырға тейеш инек.

Бөгөн беҙ юл сатында. Ысынлап та, милләт артабан ни эшләргә тейеш? Һуңғы егерме йыл тик башҡорттар файҙаһына ғына булды, тип яңылыш уйлаусылар ҙа бар. Был йылдар эсендә республикабыҙҙа йәшәгән бар милләттәр татыу йәшәне. Беҙ әлеге ваҡытта республикабыҙҙың социаль-иҡтисади үҫеш күрһәткестәре буйынса махсус том әҙерләйбеҙ. Миңә Раил Кузеевтың милләткә ҡарашы оҡшай. Ғалим милләтте бер туҡтауһыҙ хәрәкәт итеүсе күренеш тип атай. Был процесс өс факторға бәйле: тәбиғи-тарихи, социаль-иҡтисади һәм мәҙәни-сәйәси факторҙар. Төрлө тарихи осорҙа төрлө факторҙар үҫеш процесын, уның йүнәлешен билдәләй, әммә был процесты туҡтатыу мөмкин түгел. Уны башҡалар туҡтата һәм емерә алмай, тик милләт үҙе генә быны эшләй ала.

Бөгөн туған телде һаҡлау проблемаһы бик киҫкен тора. Беҙ һаман да, туған телебеҙҙе дәүләт һаҡларға тейеш, тип ҡарайбыҙ. Минеңсә, туған телде иң беренсе нәүбәттә милләт үҙе һаҡларға бурыслы. Әгәр ҙә башҡорт балаһы үҙенең туған телен өйрәнмәй икән, ғаилә был эштән ситтә икән, дәүләт ярҙамы менән генә туған телебеҙҙе һаҡлап булмаясаҡ.

Тағы бер мөһим мәсьәлә. Киләсәккә милләт фәҡәт үҙгәрештәр аша ғына үҫә аласаҡ. Беҙ күп осраҡта үҙгәреште бик ябайлаштырабыҙ. Башҡорт кешеһе Австралиялағы, Америкалағы башҡорттар менән Интернет аша бәйләнеш алып бара ала икән, был хәҙерге быуат өсөн күрһәткес була ала.



**Ә. БОҪҠОНОВ:** Кузеев башҡорт этносының формалашыуының ете этабын билдәләй. Беҙ уның теорияһын үҫтереп, башҡорт халҡының ҡиммәттәрен ҡабул иткәндәрҙе генә башҡорт тип атау идеяһын сығара алабаҙ. Шул уҡ Кузеев Башҡортостанда башҡорттарҙың потенциалын 35-40 проценттан кәм түгел тип иҫбатлай бит.

Милләт, гражданин, дәүләт төшөнсәләренә килгәндә, донъяның күп халыҡтары был процестарҙы күптән үткән. Европалағы милләттәр, мәҫәлән, милләттең халыҡ-ара хоҡуҡ нормаларына таянып йәшәй. Әйтәйек, Телдәр буйынса Европа хартияһы, БМО уставы бар. Рәсәй Федерацияһында ла беҙҙең үҫешкә булышлыҡ итерлек закондар күп. Рәсәй парламенты беҙҙең телдәр тураһындағы законды юҡҡа сығарып ултырмай. Дошманды Мәскәүҙән йә башҡа урындан эҙләп ултыра торған замандар күптән уҙҙы, дошманды үҙебеҙҙән эҙләргә кәрәк. Дөрөҫ, беҙгә үҙебеҙҙең потенциалды ғаилә кимәлендә лә, башҡа традицион дәүләт учреждениелары кимәлендә лә бойомға ашырырға кәрәк.

**М. ӘЮПОВ:** Беҙ милләт суверенитеты менән дәүләт суверенитетының айырмаһы хаҡында бер аҙ һөйләштек. 90-сы йылдарҙа был төшөнсәгә ниндәйерәк мәғәнә һалыныуын байҡаныҡ. Бөгөн Рәсәй сиктәрендә Башҡортостандың үҙаллылығы ниндәй самала? Был үҙаллылыҡ нимәнән ғибәрәт? Бөгөн шул хаҡта фараз йөрөтөү бик зарур, тип уйлайым. Сөнки заман үҙгәрҙе, Рәсәйҙә сәйәси хәлдәр башҡаса. Халыҡ, ғалимдар араһында ла республиканың бөгөнгө хәле һәм киләсәге хаҡында төрлөсә фекер йөрөй.

Мин яңыраҡ Юғары Советтың суверенитет хаҡында Декларация ҡабул ителгән сессияһы материалдарын яңынан ҡарап сыҡтым. Заманында был тарихи документ бик ентекләп, төрлө яҡлап тикшерелеп, халыҡ депутаттары тарафынан бер тауыштан ҡабул ителгән. Сессияла ҡатнашҡан 264 депутаттың өстән бер өлөшө самаһы ғына башҡорт булыуға ҡарамаҫтан, бер кеше генә ҡаршы тауыш биргән, 4 кеше бөтөнләй тауыш бирмәгән. Был, Декларация ваҡытында бөтә халыҡ мәнфәғәттәренә яуап биргән, тигән һүҙ.

Ә бөгөн хәл нисек һуң? Һис шикһеҙ, республика халҡы Республика көнөн ҙур байрам итеп билдәләй. 11 октябрь бөтә халыҡтар өсөн дә ҡәҙерле. Ул беҙҙең аңыбыҙҙы үҫтерҙе, киләсәккә өмөтөбөҙҙө нығытты, үҙ көсөбөҙ, булған байлығыбыҙ, емешле хеҙмәтебеҙ менән Рәсәйҙә үҙаллы булып, үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күреп, төрлө халыҡ вәкилдәре үҙ-ара татыу йәшәй алабыҙ тигән фекерҙе нығытты. Суверенитеттың төп әһәмиәте, минеңсә, бына шунда.

Әммә демократия булғас, бүтән төрлө фекерҙәр ҙә бар. Бигерәк тә Интернетта республиканың үҙаллылығын, милли мәҙәниәттең, сәнғәттең үҫешен, тарихты, ауылдарҙың үҙгәрешен һанға һуҡмай, Башҡортостанға бәйләнгән бөтә нәмәне яманлаусы бәндәләр күбәйҙе. Шуға күрә беҙ, суверенитет дәүерендә республикала йәшәгәндәр, уның киләсәге тураһында уйлағандар, бындай күренештәргә ҡаршы торорға, үҙаллылыҡтың әһәмиәтен бүтәндәргә лә аңлатырға тейешбеҙ. Был - бер.

Икенсенән, Рәсәй Федерацияһы субъекттарының, бигерәк тә республикаларҙың үҙаллылығы мәсьәләһе көн тәртибенән төшкәне юҡ. Сөнки төбәктәр үҙаллылығы, уларҙың киләсәктә үҫешен тәьмин итә алыуы - ул дөйөм илдең үҫешен тәьмин итеү, тигән һүҙ. Үҙәктән ярҙам көтөп, үҙәктең ауыҙына ҡарап ултырып, алға барып булмай. Ең һыҙғанып эшләп, үҙ төбәгеңде алға сығарып ҡына бөтә Рәсәйгә ярҙам итергә, уны көслө дәүләткә әүерелдерергә була. Үҙаллылыҡ - ул үҙең һәм илең өсөн яуаплылыҡ тигән һүҙ. Был хәҡиҡәтте беҙ ни тиклем тиҙерәк аңлаһаҡ, аҙымыбыҙ нығыҡ, киләсәгебеҙ ышаныслы булыр, тип ышанам.

***Бөгөн беҙ юл сатында. Ысынлап та, милләт артабан ни эшләргә тейеш? Һуңғы егерме йыл тик башҡорттар файҙаһына ғына булды, тип яңылыш уйлаусылар ҙа бар. Был йылдар эсендә республикабыҙҙа йәшәгән бар милләттәр татыу йәшәне. Беҙ әлеге ваҡытта республикабыҙҙың социаль-иҡтисади үҫеш күрһәткестәре буйынса махсус том әҙерләйбеҙ. Миңә Раил Кузеевтың милләткә ҡарашы оҡшай. Ғалим милләтте бер туҡтауһыҙ хәрәкәт итеүсе күренеш тип атай. Был процесс өс факторға бәйле: тәбиғи-тарихи, социаль-иҡтисади һәм мәҙәни-сәйәси факторҙар. Төрлө тарихи осорҙа төрлө факторҙар үҫеш процесын, уның йүнәлешен билдәләй, әммә был процесты туҡтатыу мөмкин түгел. Уны башҡалар туҡтата һәм емерә алмай, тик милләт үҙе генә быны эшләй ала.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғалимдар иҫбатлауынса, 1990 йылдың 11 октябрендә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт суверенитеты иғлан ителгәндән алып хәҙерге көнгә тиклем республикабыҙҙа йәшәүселәрҙең йәшәү кимәле уртаса 40 тапҡырға тиклем күтәрелгән. Хәҡиҡәт сағыштырып ҡарағанда нығыраҡ беленә, тиҙәр. Шуға күрә киләсәктә 11 октябрҙең әһәмиәте тағы ла артыр, тип ышанғы килә.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**




Табын артында һүҙ, асылда, йәштәр, уларҙың артабанғы яҙмыштары тирәләй уралды. Ул кистәге сәйер әңгәмә барышында мин ҡапыл йыуашланып ҡалған хужаны икебеҙгә генә аңлайышлы телдә мәрәкәләүҙән йәм таптым. Күптән ундай рух күтәренкелеге тойғаным юҡ ине үҙемдә. Бер яҡтан, тәгәрәп ятып көлгө килә, икенсе яҡтан, әхлаҡи ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисерәм. Әйтерһең, фирҡәнең бер ағзаһын аҫтыртын рәүештә мыҫҡыл итеп, үҙемдең ҡыйралған яҙмышым, барлыҡ яфаларым өсөн тотош партиянан үс алам.

Кинәт йомшарып ҡалған хужаны, ысынлап та, танырлыҡ түгел ине. Моғайын, мәжлес һүҙымында иренә бер нисә мәртәбә һынаулы ҡарап алған ҡоҙағый ҙа, атаһына аптыраулы ҡараш ташлап ҡуйғылаған Вәлимә лә шулай уйлағандыр. Ҡоҙа булаһы кешене мин, ҡыҙы һөйләгән хәбәргә, бигерәк тә үҙемә ҡарата баштағы дорфалығына ҡарап, эшендә лә, ғаиләһендә лә бөтәһен үҙ ихтыярына буйһондорорға тырышҡан деспот, үҙ хөкөмкәйҙәре үҙ ҡулында булған кантон рәүешендәрәк күҙ алдыма килтерә инем. Һәр хәлдә, минең был уйым дөрөҫлөктән бик алыҫ булмағандыр. Шундай кеше күҙ алдында йөҙ ҙә һикһән градусҡа үҙгәрһен әле! Уның үҙ-үҙен тотошон, бахыр ҡиәфәтен күҙәтеп ултырыу, бер яҡтан, ҡыҙыҡ, ә икенсе яҡтан, йәлләү тойғоһо уята ине.

Мәҫәлән, мин килеүебеҙҙең маҡсаты, туған-тыумасабыҙҙың юҡ дәрәжәһендә булыуы арҡаһында яусы вазифаһын үҙемә башҡарырға тура килеүе хаҡында һүҙ башлағандан һуң:

- Кәнишнә, ҡыҙ һорау икмәк һорау һымаҡ ҡына түгел инде... - тим дә, тәрән мәғәнәле итеп туҡтап алам. Мин әйтеп аңлатҡыһыҙ ләззәт кисерәм, ә ҡоҙам бер буҙара, бер ҡыҙара, күҙҙәрен ҡайҙа йәшерергә белмәй ыҙалай.

"Ә-ә, йән яфаһы бына шулай була ул, - тип уйлайым, - әле һин выждан ғазабын хаҡлы рәүештә кисерәһең. Үҙең түш кеҫәңдәге ҡыҙыл ҡатырғаға ышыҡланып, хаҡмы, нахаҡмы икәнен тикшереп тормайынса, кемдәрҙе генә рәнйетмәгәнһеңдер".

Бер аҙға өҙөлөп торған әңгәмә киренән ялғанып китә. Һәүетемсә генә һөйләшеп ултыра торғас, бер яйы килеп сыға ла, мин тағы ла йәтеш кенә итеп төрттөрөп алам:

- Буштың атаһы күптән үлгән, тиһәләр ҙә, Вәлимәне тикәйгә алабыҙ инде - элекке һымаҡ ҡалым түләү юҡ бит.

Был сәнстереүҙән ҡоҙа йәнә ҡыҙарына ла бүртенә, ә һүҙ айышына төшөнмәгән ҡоҙағый үҙенсә ыңғайға һыпырырға ашыға:

- Уй, ҡоҙағый, ниндәй ҡалым? Заманы улмы?

- Шаяртам, - мин әйтәм. - Ә шулай ҙа буштан-бушҡа алмайым ҡыҙығыҙҙы. Уның хаҡы - берҙән-бер улым.

Ҡыҫҡаһы, мин ул кистә ҡоҙа булаһы кешене нисек теләнем, шулай мәсхәрәләнем. Халыҡта ундай күренеште ҡыйыш атып, тура тейҙереү, тиҙәр шикелле. Күптән быңдай күңел күтәренкелеге менән рухи өҫтөнлөк тойғоһо кисергәнем юҡ ине - ярты көн эсендә, гүйә, тотош бер ғүмер йәшәнем.

Ә ҡоҙаға килгәндә, бесәй менән сысҡан уйынына оҡшаған был тамаша башта ҡыҙыҡ тойолһа ла, аҙаҡҡа табан йәлләмес булып китте. Ул меҫкендең күҙҙәрен күрһәгеҙ ине! Ҡасандыр мутлыҡ һәм хәйләкәрлек саҡҡылары уйнап торған ҡараштa кис буйы: "Һатма мине! Артығын ысҡындыра күрмә!" - тигән өнһөҙ ялбарыу аҫылынып торҙо. Мин уның инәлеү тулы күҙҙәренә ҡараған һайын: "Бик кәрәгең бар ине, - тип уйлайым. - Әгәр йәштәр осрашмаған булһа, был донъяла барлығың менән юҡлығыңды ла белмәҫ инем - хәтеремдән бөтөнләй юйылғайның"

Был кистә уға төрттөрөпсәнстереүҙәрем дә тормошомдағы берҙән-бер йыуанысым - улым өсөн ине. Дөрөҫөрәге, уның бәхете өсөн. Ярата бит ул Вәлимәне, ысын күңелдән ярата. Сәғитем өсөн ҡулымдан һәм телемдән килгәндең барыһын да эшләргә әҙермен. Әгәр ҡоҙа булаһы кеше яҡындары менән улай тәкәббер ҡыланмаһа, миңә дорфа ҡағылмаһа, мин дә был кәмитте ҡороу түгел, үҙемде танытып та тормаҫ инем. Ә төптәнерәк уйлап ҡарағанда, нисек кенә аяныслы булмаһын, һәр кем донъялыҡта ҡылғанының ҡоһорон донъялыҡта татырға тейеш.

Аяныс, тигәндәй, ул үҙе тере саҡта ҡоҙа булып өлгөрә алманы - Сәғит менән Вәлимә килендең туйына ун биш көн ҡалғас, бик серле шарттарҙа райком машинаһында Ҡыҙылъярҙан осоп үлде. Ете төн уртаһында япа-яңғыҙы район биләмәләрендәге урып-йыйыу барышын тикшереп ҡайтып килгәндә тап әлеге яр өҫтөндә йөрәге туҡтаған, тинеләр. Ундай саҡта фараздар күбәйә: ҡайһы берәүҙәр, руль артында йоҡлап киткән, тип һөйләһә, икенселәренең хәбәре буйынса, лаяҡыл иҫерек булған, имеш.

Шәхсән минең эске һиҙемләүемә нигеҙләнгән дүртенсе фараз да бар. Уның буйынса, ҡоҙаның был һәләкәте осраҡлы түгел һымаҡ. Минең тәрән инаныуымса, ул ғәрлегенән, мин-минлеге менән ғорурлығын еңә алмауҙан был аҙымды аңлы рәүештә яһағандыр. Әгәр шулай булһа, ысынлап та, ниндәй үкенес! Утыҙ йыл элек булған ул ваҡиға, бер уйлаһаң, мәҙәк кенә. Тормоштоң өҙлөкһөҙлөгөн тәьмин итеүсе ҡеүәтле инстинкттың саҡырыуына буйһонған үҫмерҙәрҙең шуҡлығы. Бөтәһе лә яп-ябай: тот та әлеге хәлде хәтерләп туйғансы көл, кәрәк булһа, ғәфү үтен һәм онот. Кем менән низәр булмай был ғүмерҙә? Юҡ шул, беҙ донъяның һемәйткес шартлылыҡтарын ысын итеп ҡабул итәбеҙ. Йәнәһе, беҙ райкомдың икенсе секретары, ә ул кем? Нишләп беҙ уның алдында ваҡланып торорға тейеш?

Мәрхүмдең анау кистәге ялбарыу тулы ҡарашын күҙ алдыма килтерәм дә, кинәйәләр яһап ғәрләндереүемә, йөрәген өҙгөләүемә үкенәм. Әллә ҡасанғы нәмәләрҙе соҡоп сығармай ғына һөйләшеп булмағанмы икән? Уйлайым-уйлайым да, үҙемдең ҡылығымды ла аҡлап ҡуям - әгәр уны шөбһәләндереп, рухи өҫтөнлөк алмаһам, бәлки, йүнле һөйләшмәҫ тә ине.

Аңлауығыҙса, былар тик фараз ғына. Ә һәр бер фараз мең төрлө һорау тыуҙыра. Ләкин был һорауҙарға яуапты әҙәм балаһы түгел, ә тормош ғәли йәнәптәре үҙе генә бирә ала.

**(Аҙағы).**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# ЙӘШТӘРЕБЕҘҘЕҢ СИТКӘ КИТЕҮЕНЕҢ...

## ыңғай яҡтарын күрәйек



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

**Айбулат ПСӘНШИН, география фәндәре докторы, профессор:** Фәнни экспедицияларға сыҡҡанда, Башҡортостандан ситтә йәшәгән милләттәштәр менән йыш осрашабыҙ һәм уларҙың көнкүреше менән танышҡанда ике яҡлы уй-тойғолар барлыҡҡа килә. Ситтә йәшәгән башҡорттарҙың фольклор, этнография материалдары байыраҡ, урындағы мәҙәни үҙенсәлектәр анығыраҡ күҙәтелә. Был йәһәттән айырыуса Силәбе, Ҡурған башҡорттарын билдәләп үтергә була. Икенсе яҡтан, ассимиляция процесы үҙен һиҙҙермәй ҡалмай. Был проблема бигерәк тә Пермь башҡорттары араһында киҫкен тора. Ассимиляция процесын тотҡарлауға мәҙәни бәйләнештәр ниндәйҙер кимәлдә булышлыҡ итә. Әммә был юҫыҡта эштең тығыҙыраҡ, әүҙемерәк алып барылыуын теләр инем. Артистарыбыҙ, яҙыусыларыбыҙ сит өлкәләргә йышыраҡ сығып торһон ине. Татарстан үҙ милләттәштәренә рухи, мәҙәни ярҙам күрһәтеү яғынан бик әүҙем эшләй. Был йәһәттән беҙ әлегә ҡалышабыҙ. Әлбиттә, барыһы ла иҡтисадҡа бәйле. Шулай ҙа был тәңгәлдә дәүләт программалары булырға тейеш, тип уйлайым.

Күп кенә милләттәштәребеҙ Себерҙә эшләп, шунда донъя ҡора. Был матди хәлде яҡшыртыу өсөн, бәлки, яҡшыраҡтыр. Шулай ҙа эш хаҡы өсөн генә Себерҙә көн күреүҙе барыбер аҡламайым. Сит төбәк тирмәненә һыу ҡойғансы, үҙ иҡтисадыбыҙҙы үҫтереүе хәйерлерәк. Себер яҡтарына китеүселәр үҙенең сәләмәтлеген дә уйларға тейеш бит. Унда тиҫтәләп йыл йөрөп эшләп, ирҙәребеҙ үҙ һаулығына ныҡ зыян килтерә. Шул уҡ ваҡытта милләттәштәребеҙҙең донъяның төрлө мөйөштәрендә ғүмер итеүе насар түгел. Һуңғы осорҙа бигерәк тә йәш быуын өсөн ыңғай күренеш күҙәтелә. Элек йәштәргә илдең үҙәк уҡыу йорттарына инеүе тормошҡа ашмаҫ хыял ғына булһа, хәҙер ҡыҙҙар-егеттәребеҙ БДИ имтихандары һөҙөмтәләре буйынса Мәскәүҙең бишәр вузына инеү мөмкинлеге алды. Йәштәребеҙҙең ситтә тороп ҡалыуҙарынан да ҡурҡырға кәрәкмәйҙер. Был процестың ыңғай яҡтарын күрәйек. Юғары кимәлдәге белгес булып үҫһәләр, башҡорт йәштәре үҙ халҡы файҙаһына ла эшләйәсәк бит. Йәғни, уларҙы ситтә йәшәп тә, үҙ халҡына хеҙмәт итерлек итеп тәрбиәләйек, тимәксемен.

**Мөнир ИҠСАНОВ яҙып алды.**

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

**Баймаҡ яҡтарында йор һүҙле халыҡ йәшәй. Төрлө йылдарҙа барлыҡҡа килгән ҡыҙыҡ хәлдәр йөрөй халыҡ теләндә, ауылдан-ауылға күсә. Һеҙҙең иғтибарығыҙға шундай бер нисә мәҙәк хәлдәрҙе тәҡдим итәм.**




### Бөтәбеҙгә бер ҡолаҡ

Элегерәк бесәндә ҡырҙа кәбәнгә ҡойоп, уны көҙ генә ташыр булғандар. Шулай өс әҙмәүерҙәй ир бер бабайҙың бесәнен ташыған, ти. Әбей быларға баш ите бешереп ҡуя. Тик һаран бабай тракторсыларҙы көтөп тормай, башты рәхәтләнеп яңғыҙы ашап, бер төрлө итеп ҡуя. Тракторсылар ашарға ултырһа, өҫтәлдә бер ҡолаҡ ҡына ятып ҡалған. Етмәһә, әбейҙең бесәйе мыяулап, ашарға һорай ҙа һорай. Астың асыуы яман бит инде, бесән ташыусыларҙың береһе: "Кит әле, йәнде көйҙөрмә! Былай ҙа бөтәбеҙгә бер ҡолаҡ", - тип мәхлүкте тибеп осора. Шул ваҡыттан алып Күсей ауылы халҡы телендә аҙ тигән мәғәнәлә "Бөтәбеҙгә бер ҡолаҡ" тигән лаҡап йәшәп килә.

### Мөһим йөк

80-се йылдар башында "Һаҡмар" колхозының Юлыҡ бригадаһы бригадиры ғүмер баҡый колхоздың тупылдағын (Т-25 тракторын шулай тип йөрөткәндәр) йөрөткән ағайға ауылда клуб төҙәп ятҡан әрмәндәрҙе һабантуйға алып барып ҡайтырға ҡушҡан. Һәр эште ерена еткереп эшләгән тракторсы был эште лә намыҫ менән үтәгән. Ай аҙағында колхоз бухгалтерияһы тракторсы тапшырған нарядтарының берәһендә "Перевозка армян на сабантуй" тигән яҙыуҙы күреп, ниндәй хаҡ ҡуйырға белмәй аптыранған, ти.

### Декретҡа сыҡҡандар

Бер ағай эштән арып, асығып ҡайтҡан да ҡатынынан ашарға таптыра икән. Тегеһе: "Бына бит, күпме эш эшләп, өлгөрә алмай ятам. Бар, кәртәнән йомортҡа индер, аш өлгөргәнсе, ҡурып бирермен", - тигән. Тиҙҙән асыулы ире килеп инә лә:"Ашарһың ашамай ни йомортҡа, тауыҡтарың декретҡа сығып бөткән!" - ти икән.

### Өс эте бар...

Бер ир көтөүгә малдарын ҡыуа. Бер йортҡа яҡынлағанда, быға ике эт ташлана. Ир аптырап ҡалмай, уларҙы ҡулындағы таяҡ менән туҡмап, йорттарына бағтырып индерә. Шул саҡ тәҙрә асылып китә лә йорт хужабикәһе әрләшә башлай. Ир: "Дә-ә, был йортта өс эт икән: икәүһе ҡапҡа аҫтынан, берәүһе тәҙрәнән өрә", - тигән. Шул ваҡыттан алып беҙҙең яҡтарҙа кемдеңдер ҡатыны усал булып күренһә, "Йортонда өс эт икән" тигән лаҡап йөрөй.

### Яратыу билдәһе

Элегерәк йәнйегеттәр Сибай баҙарына тиҙәк һәм башҡа ваҡ-төйәк һатырға йөрөр булған. Бер олатай ҙа әбейен үгеҙ арбаһына ултыртып, ниҙер һатырға баҙарға юллана. Былар ҙан алдараҡ йәнә бер ирле-ҡатынлы, шулай уҡ үгеҙ егеп, ҡушарлашып ултырып китеп баралар, ти. Теге ир ҡатынын ҡосаҡлай ҙа үбә, ҡосаҡлай ҙа үбә, ти. Бабай ҙа, түҙмәй, әбейен ҡосаҡлап үбеп ала. Әбей аптырап: "Был ни ҡыланышың?"-тип ҡысҡырып ебәрә. "Ана бит тегеләр нисек матур бара", - ти икән бабай. Әбейе: "Алйот, уның ҡатыны һаңғырау бит, шуға күрә ире иңкәйеп уға хәбәр һөйләй", - тигән.

### Таңды һыйпаманым...

Һуғыш йылдарында Таулыҡайҙан рәйес Әхмәтов етәкселегендә бер төркөм колхозсы урманда ағас әҙерләп ята икән. Араларында йор һүҙле Мортаза исемле кеше лә була.

Таң алдынан сабырһыҙ рәйес Мортаза ағайҙың ҡабырғаһына төртөп: "Мортаза ағай, таң ата түгелме?"- тип һорай икән. "Әллә, атһа аталыр, шарт итмәне бит әле",- тип яуаплай икән тегеһе иренеп кенә.

Икенсе көндө рәйес тағы шул һорау менән мәҙәһыҙлай икән: "Мортаза ағай, таң беленмәнеме икән?" "Әллә, беленһә беленер ҙә, һыйпап ҡараманым", - булған яуап.

### Кешегә соҡор ҡаҙһаң...

Берәү эш хаҡы алып ҡайтып килгән дә, ҡоҙоҡҡа эйелеп, һыу эсергә булған. Шул ваҡыт аҡсалары һыуға төшкән дә ҡуйған. Өйөнә ҡайтҡас, аҡсаларын йәйеп, киптерергә һала. Шул саҡ күршеһе инә һәм урындыҡта тулып ятҡан аҡсаларҙы күреп, милицияға йүгерә. Бер ваҡыт өйгә ике хоҡуҡ һаҡсыһы килеп инеп, аҡсаның ҡайҙан килеп сығыуы менән ҡыҙыҡһына башлай. Кеше күршеһенең көнләшеүен белеп: "Минең аҡса баҫа торған станогым бар. Тик уны күршем алып торҙо", - ти. Хоҡуҡ һаҡсылары шунда уҡ күршеһенә йүнәлә. Ә уныһы... көмөшкә ҡыуып ултырған була. Ысынлап та, кешегә соҡор ҡаҙмаҫҙан төшөрһөң, тип юҡҡа әйтмәгәндәр.

### Еләк һатаһыңмы, әхирәт?

Минең инәйем Магнит баҙарына еләк һатырға барған, ти. Вокзалда баштан аяҡ үҙе кеүек кейенгән, ҡулына еләкле биҙрә тотҡан бер әбейҙе күреп: "Ыста-ыста, әхирәт, һин дә еләк һатырға килдеңме?"- тип һорай икән. Был инәйҙең үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр күргән көҙгөһө булған.

### Ауыҙ күперә лә китә...

Бер бабайҙы хирургия бүлегенә операция яһарға килтергәндәр. Ул операциянан бик ныҡ ҡурҡҡан, шуға күрә хирург уға дарыуҙар яҙып биргән. Бер нисә көндән бабай, үпкәләп, табипҡа килгән. "Улым, башҡаса дарыуҙарыңды эсмәйем. Ауыҙым күперә лә китә, күперә лә китә",- ти икән. Баҡһаң, медсестра бабайға свеча дарыуҙарын нисек ҡулланырға икәнен өйрәтмәгән, ә ул свечаларҙы ашап тик йөрөгән.

### Тамыр йәйгән…кәбән

Бер ағай кәбәнен алып ҡайтырға тракторсы саҡырткан. Теге күпме генә тырышмаһын, кәбәнде урынынан ҡуҙғата алмай икән. Аптырағас, тағы бер трактор саҡырталар. Икәүләп тә кәбәнде ҡуҙғата алмайҙар былар. Хужа үҙе: "Куйығыҙ, алдыра алмаҫһығыҙ..." - тип тик тора икән. Аптырағас, бер тракторсы: "Ағай, кәбәнең тамыр йәйгәнме әллә?"- тип һораған. Тегеһе һаман: "Куйығыҙ, алдыра алмаҫһығыҙ..."- тип ҡабатлай икән. Унан: "Үҫеп ултырған ағасҡа ҡойолған бит ул",- тип әйтә икән. Беҙҙең яҡтарҙа хәҙер ҙә кәбәнде алып ҡайтыуы ауырға төшһә, "Уй, тамырлы кәбән был!" тип әрләйҙәр.

Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.

## ЗАУЫҠ

*Хисмәт ЮЛДАШЕВ.*

# ИР БУЛҺАМ, ЙҮНЕН ТАБАМ

## Киттем Себергә табан

### Ҡырылмайбыҙ

Ҡайтып керҙем тамаҡ ҡырып,
Каршы алдың таба ҡырып.
Өйҙә балалар, тышта малдар -
Аҡырыш та баҡырыш.

Торһа тора ла ҡуя бит
Донъялары арҡыры.
Минә ҡырын ҡарай-ҡарай
Әйтәһеңдер - бар ҡырын!

Бөтә хыялың бит һинең -
Айныҡ булыуым минең.
Минә ҡырын ҡарай-ҡарай
Тағы ла нимә тинең?

Ҡырыштырһам да кеҫәмде,
Юҡтыр тиндең баҡыры.
Таҡыр кеҫәле ирҙән дә
Юҡтыр ирҙең бахыры.

Бәйге түгел, яу ҡырҙарын
Үткәнде ата-бабам,
Ҡырылмаһа ҡырыҡ яҡтан,
Ир булһам, йүнен табам.
Киттем Себергә табан.

### Тубыкланыу

Иблис көйҙәренә генә,
Йәнәһе лә, йырлап-бейеп,
Тубыкланыр, тиеп, беҙҙе,
Инде башын эйер, тиеп,
Ҡыуандың, ахыры, иртәрәк,
Океан артындағы Дейеү.

Баҙар шауы башҡа ҡабып,
Тубыкланһаҡ, тубыкландыҡ,
Һис кенә лә йығылманыҡ,
Шуныһы ла булһын аныҡ:

Асылына ҡайтҡан һайын,
Нурландырып изге айын,
Иҫтән юймай рухландырған
Салауатты һәм Юлайын,

Баҫҡан һайын намаҙлыҡҡа,
Батмаҫын белеп һаҙлыҡҡа,
Доға ҡыла тубыкланып
Яуға ҡаршы торор халыҡ!

### Шәп сәп

Сығып ҡына килә берәү
Кеше рәтенә, шәпкә,
Нимәнән генә атмайҙар -
Әйләнә башы сәпкә.

Һин дә бит шул квадратта,
Бөттө донъя түңәрәк.
Ел дә үтмәҫ арабыҙҙа
Туптар шартлай тәгәрәп.

Йырағайыр микән ара
Ҡабат яҡынаймаҫлыҡ?
Көнсөл гәйбәтсе туптары
Шартлай ҙа икән һаҫыҡ.

Уны улар ҡайҙа шулай
Етештерәләр икән?
Шуны эшләп имен-аман,
Етеш торалар микән?

### Һый һәм йыр

Ҡайттыҡ атай нигеҙенә,
Сәбәп бар шатланырға.
Ғәҙәт бар ҡанатланып
Аттарға атланырға.
Һыйы ла бар,
Йыры ла бар -
Бөтәһен һыйындыра,
Һыйыр тота әле инәй,
Аҙбарҙа һый-йыр тора!

### Йәшлеккә ҡайтып

Ҡолаҡсыныңды төшөр ҙә
Яғаңды күтәр.
Ҡоторһон буран, тоташһын
Ер менән күктәр.

Һыуыҡҡынамы ни - ҫыуыҡ,
Тоҡта боҙ туңған.
Ат егеп алып санаға,
Төрөнөп тунға,
Киттем утынға.

Һыуығы ла, бураны ла
Ҡурҡыныс түгел,
Гөлсөмдәрҙең тәҙрәһенән
Ҡарап ҡалды гөл.

Үҙе лә күреп ҡалғандыр
Үтеп киткәнде.
Их, белһә ул минең ниндәй
Егет икәнде!

### Кәрәгең бар

Берәүгә кәрәгең юҡ.
Күләгән күләүектә,
Унда сағыла күк тә.
Эймә башыңды, күтәр!

Ауырҙыр, ә еңеллек
Емешһеҙ була, ҡыҫыр.
Гонаһҡа батҡан ерҙә
Күләгән генә - дуҫың.

Тик күләгән генә бар,
Уныһына ла шарт бар:
Башыңды ҡояшҡа тотоп
Тор ҙа тор,
Йә бар ҙа бар.

Тән түгел, йән үртәлгән...
Ишетәм "түҙ" тигән һүҙ -
Кәрәгең бар күктәргә,
Кәрәгең бар күктәргә.

### Фажиғә

Нимә булһын тиһең минә?
Нимә булһын булғандан!
Яҡшыраҡ, имеш, данлыҡлы
Булғансы булмағандан.

Дан иҫертә, айыҡ килеш
Ҡараттырмай донъяға.
Ул бөйөк ҡулъяҙмаһын да
Усаҡҡа ташлап яға.

Ҙур фажиғә түгелме ни
Янып бөтөүе утта?
Ҡулъяҙмалар янмай, тиҙәр,
Фажиғәлеректер хәлдәр -
Уҡыусы уны юҡта,
Уҡыусы һине юҡта.

### Сыбыртҡым тип үрелгәнем

Хәлдәрем ҡалай, тиһеңме -
Хәлдәрем ҡотолғоһоҙ.
Тамағымда төйөр тора.
Төйөр ҙә йотолғоһоҙ.

Ҡаҙалып ҡалды ҡауырый
Яр ситендә -
Ҡомлоҡта.
Башымды эйҙе
Ауыр уй,
Бар әйләнәм -
Шомлоҡта.

Шыбырлай ҡолаҡҡа ҡылған,
Бәрелә йөҙгә томан.
Сыбыртҡым
Тип үрелгәнем -
Шылышып килгән йылан.

✓ *Диетологтар ҡара емеш, һырғанаҡ, көртмәле, виноград, мүк еләге, ҡарағат, анар, кишер, помидор, кәбеҫтә, ҡабаҡ антиоксиданттарға бай икәнен иҫегеҙгә төшөрә. Шулай уҡ был исемлеккә йәшел сәй менән какао ла инә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАЙҺЫ ЭШ...

## көсөргәнешлерәк?

■ Гарвард университеты тикшеренеүселәре белдереүенсә, етәкселәр ябай хеҙмәткәрҙәргә ҡарағанда стресҡа бик үк бирешеп бармай. Быны ҡан составын кортизол - стресс гормонына тикшергән тест күрһәткән, сөнки был гормон кеше көсөргәнеш кисергәндә бүленеп сыға. Етәкселәрҙә картизол унын ҡул аҫтында эшләүселәрҙекенә ҡарағанда 27 процентҡа түбәнерәк булып сыҡҡан. Ғалимдар быны етәкселәрҙең барыһын да контролдә тотоуы, ә ябай эшселәрҙең юғары торғандарҙың ихтыярына буйһонорға мәжбүр булыуы менән аңлата. Шулай итеп, белгестәр быға тиклем киң билдәле фекерҙе -ябай вазифала эшләүгә ҡарағанда, етәксе булып эшләүҙең нервыларҙы күпкә нығыраҡ ҡаҡшатыуын кире ҡаға.

■ Швецияның Каролина университеты ғалимдары яһаған һығымта буйынса, ҡатын-ҡыҙҙар ни тиклем антиоксиданттарҙы күберәк ҡабул итә, шул тиклем уларҙың йөрәге инфаркт хәүефенән һаҡлана. Ғалимдар үткәргән тикшереүҙәрҙә 49 йәштән 83 йәшкә тиклемге 32 мең ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Белгестәр уларҙың һуңғы ун йыл эсендә нимә ашарға ғәҙәтләнеүе менән ҡыҙыҡһынған. Ошо ун йылда антиоксиданттарға бай ризыҡтар менән туҡланыусылар йөрәк сирҙәренә 20 процентҡа һирәгерәк бирешкән. Шулай уҡ емеш-еләк һәм йәшелсә ашарға яратыусылар иң сәләмәт булып сыҡҡан. Диетологтар ҡара емеш, һырғанаҡ, көртмәле, виноград, мүк еләге, ҡарағат, анар, кишер, помидор, кәбеҫтә, ҡабаҡ антиоксиданттарға бай икәнен иҫегеҙгә төшөрә. Шулай уҡ был исемлеккә йәшел сәй менән какао ла инә.

■ Гүзәл заттарға бәйле тағы ла бер мәғлүмәт. Әҙ ҙә түгел, күп тә түгел, теп-теүәл 17 йыл - уртаса бар ҡатын-ҡыҙҙар ҙа тап ошо тиклем ваҡытты диетаға сарыф итә. Бөйөк Британия диетологы Кевин Доррен, һәр хәлдә, шулай тип раҫлай. Ул үҙенең илендә ҡатын-ҡыҙҙар араһында һорау алыуҙар үткәргән һәм уларҙың 90 проценты ҡасан да булһа диетала ултырыуын асыҡлаған. Бынан тыш, яуап биреүселәрҙең күпселеге диетаға һәр ярты йыл һайын күсә, ә был ваҡыт яҡынса ете аҙнаға һуҙыла икән. Яҙын диета тотоусыларҙың һаны тағы ла арта, сөнки һәр гүзәл зат үҙен йәй миҙгеленә әҙерләй башлай. Тыуған көн, туй алдынан да ябығырға тырышыусылар күп кенә. Бына ошоларҙың барыһын да бергә ҡушһаң, тап 17 йыл ваҡыт килеп сыға, ти белгес.

■ АҠШ-тың Миннесота университеты ғалимдары көн һайын йогурт ашау ҡан баҫымы күтәрелеү сирен булдырмаҫҡа ярҙам итә, тип билдәләй. Йогурт составындағы кальций ҡан тамырҙарының һығылмалылығын һаҡларға ярҙам итә. Британияның диетологтар ассоциацияһы ағзаһы Рик Миллер аныҡлап китеүенсә, кальций ҡан тамырҙары һәм мускул системаһын нормала тоторға ярҙам итә. Быны тикшеренеүҙәр ҙә раҫлай. Көнөнә 120 грамм йогурт ашаған кешеләрҙә был сирҙәр барлыҡҡа килеү хәүефе 31 процентҡа кәмегән. Әммә белгестәр иҫкәртеүенсә, аҙыҡ өҫтәмәһе булараҡ тәҡдим ителгән кальций кире тәьҫир итә - артерияларҙың стенаһы ҡалыная.

■ Лондондағы Империя колледжы хеҙмәткәрҙәре үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, шоколадта йүткереүҙе баҫыу һәләтенә эйә булған матдә - теобромин барлығы асыҡланған. Шуға ла һыуыҡ тейгәндә шоколад ашау файҙалы. Татлы аҙыҡтың ыңғай яғы был ғына түгел. Шоколад тирене ҡояш нурҙарынан һаҡлай һәм йөрәк-ҡан тамырҙары торошон яҡшырта.

БЫЛ ҠЫҘЫҠЛЫ!

# МУЗЫКА ДАУАЛАЙ ҘА...

## ауырыуға ла һабыштыра

**Музыка ярҙамында кеше характерының формалашыуына тәьҫир итеп булыуын Аристотель дә раҫлаған. Бөгөнгө көндә лә ғалимдар тарафынан был юҫыкта төрлө тикшеренеүҙәр уҙғарыла һәм музыканың ыңғай тәьҫире хаҡында һығымталар эшләнә.**



Әбүғәлисина ла музыканы дауалау ысулы, тип ҡараған. Һиндостандың күп дауаханаларында милли көй мотивтары иҫкәртеү сараһы булараҡ ҡулланыла. Мәҫәлән, Мадрас ҡалаһында музыка-терапевтар әҙерләүсе махсус үҙәк тә асылған. Улар тарафынан ҡан баҫымы һәм медицина әлегә ярҙам итә алмаған ҡайһы бер психик ауырыуҙарҙы дауалау өсөн музыкаль пьесалар уйлап табылған. Ғалимдар музыканың һаулыҡҡа тәьҫир итеүен түбәндәгесә аңлата: музыка организмдың һәр күҙәнәген тирбәлдереүсе энергетик майҙан булдыра. Беҙ "музыкаль энергияны" үҙебеҙгә һеңдерәбеҙ һәм ул, үҙ сиратында, тын алыу ритмын, ҡан тамыры баҫымын, йөрәк ҡағыуы йышлығын үҙгәртә.

Американлылар күп тәжрибәләр уҙғарғандан һуң, **Шуберт, Шуман, Чайковский, Шопен һәм Листың** романтик музыкаһы стресты йомшартыуға, иғтибарҙы туплауға ярҙам итеүен асыҡлаған. Был музыканы мөхәббәтте, хистәр ялҡынлығын һәм симпатияны әүҙемләштереү өсөн ҡулланыу яҡшы, тип табылған. **Джаз, блюз, реггиның** мажор көйҙәре иһә кәйефте күтәреүгә, депрессиянан ҡотолоуға, тойғолар ҡыҙыулығын һүндерергә һәләтле. **Барокко стилендәге** (Бах, Гендель, Вивальди, Корелли) музыка тотороҡлолоҡ, тәртип, хәүефһеҙлек тойғоһо бирә, шулай уҡ уҡыуҙа һәм ижадта кәрәкле рухи көс биреүсе мөхит булдыра. **Гайдн, Моцарттың** классик музыкаһы асыҡлылыҡ, элегантлыҡ, ябайлыҡ менән айырыла һәм иғтибарҙы, хәтерҙе яҡшыртыуға булышлыҡ итә. **Румба, маранга, макарена** тере ритм һәм импульсивлыҡ менән айырыла. Улар йөрәк тибешен һәм тын алыуҙы йышыраҡ һәм тәрәнерәк итә, кәүҙәне хәрәкәт иттерә. **Самба** бер үк ваҡытта ҡуҙғытыу һәм тынысландырыу үҙенсәлегенә эйә. Ҙур булмаған дозала **рок-музыка** әүҙем хәрәкәткә көйләүсе тойғолар уятырға, ауыртыуҙы һәм көсөргәнешлекте баҫырға мөмкин. Ләкин бындай музыканың дозаһын аҙға ғына арттырыу ҙа стресҡа һәм тән ауыртыуына килтерергә мөмкин. **Дини һәм йола музыкаһы, грегориан йырҙар** тынысландыра һәм ҡәнәғәтлек тойғолары тыуҙыра.

### "Моцарт һөҙөмтәһе"



Иң көслө һауыҡтырыу һөҙөмтәһенә Моцарт музыкаһы эйә икән. 90-сы йылдар башында Калифорния университетында тәжрибә уҙғарылған. Эксперимент Моцарт музыкаһын ун минут тыңлаған студенттарҙың "интеллект коэффициенты" 8-9 берәмеккә артыуын күрһәткән. Тәжрибәлә ҡатнашыусылар араһында Моцарттың музыкаһын яратыусылар менән бер рәттән, уны ҡабул итмәүселәр ҙә ҡатнашҡан, ләкин ике төркөмдә лә һөҙөмтә бер үк булған, йәғни студенттарҙың аң кимәле берҙәй үк артҡан.

Францияның көнбайыш монастырҙарында монахтар һыйырҙар алдында Моцарт музыкаһын башҡарған осраҡта һуңғыларының һөттө күберәк биреүе хаҡында һығымта яһаған. Вашингтон штатында иһә иммиграция бюроһы хеҙмәткәрҙәре төрлө илдән килгән сит ил граждандарына инглиз телен өйрәткәндә Моцарт музыкаһын тыңлатҡан. Был осраҡта программаны өйрәнеү ваҡыты байтаҡҡа ҡыҫҡарған.

### Рок -ағыу

Японияла балаға күкрәк һөтө имеҙеүсе 120 әсә менән тәжрибә үткәргәндәр. Берәүҙәр - классик, ә икенселәр поп-музыка тыңлаған. Беренсе төркөмдә әсәләрҙең күкрәк һөтө 20 процентҡа артһа, заманса музыка яратыусыларҙа 50 процентҡа кәмегән.



Рок-музыка беҙ ишетмәгән, ләкин беҙҙең организм "яҡшы ишеткән" ультра һәм инфра-тауыштар менән йоғонто яһап, баш мейеһен ҡаҡшатырға мөмкин. Бындай музыканың кеше психикаһына тәьҫир итеүе бигерәк тә ҡурҡыныс. Психолог Ф. Азаров фекеренсә, рок-музыка кешене үҙ-үҙенә ҡул һалыуға этәрергә мөмкин. Быны дөрөҫлөккә тап килеүе хаҡында күпселек рок-музыка төркөмдәре гитаристарының ошо аҙымға барыуы күрһәтә.

### Тыныслыҡ һәм тауыш



Әгәр ҙә кешене абсолют тыныслыҡта ҡалдырғанда, ул был хәлдә 40 сәғәттән дә артыҡ түҙә алмаясаҡ. Тауыш бөтөнләй булмаған ерҙә ысынбарлыҡ тойғоһо юғала, галлюцинациялар барлыҡҡа килә, пульс кәмей. Шул уҡ ваҡытта тауыш айырыуса көслө һәм даими булғанда ла һаулыҡ өсөн хәүефле.

Тауыш ишетеү һәләтенә генә йоғонто яһамай. Ул ҡан баҫымының күтәрелеүенә, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына зарар килтерергә, ашҡаҙандың сей яраһын барлыҡҡа килтерергә һәм ҡайһы бер йоғошло ауырыуҙарға бирешеүсәнлекте арттырырға мөмкин. Артыҡ көслө тауыш материалды үҙләштереүгә ҡамасаулай, ярһыулыҡтың, тиҙ арыуҙың сәбәбе булырға мөмкин. Тауыш - хеҙмәт етештереүсәнлеге кәмеүенең, бәхетһеҙлек осраҡтарының һәм хаталарҙың сәбәпсеһе.

Аэропорт эргәһендә урынлашҡан мәктәпкә йөрөүсе балаларҙың ҡан баҫымы юғарыраҡ, ә тауыш булмаған ерҙәге мәктәптә белем алыусыларҙың, киреһенсә, ҡан баҫымы түбәнерәк булыусан. Тауыш йоғонтоһона дусар булыусы балалар интеллектуаль үҫеш йәһәтенән артта ҡала, бирелгән математик мәсьәләләрҙе яйыраҡ сисә, ә уңышһыҙлыҡҡа осрағанда артабанғы көрәштән тиҙерәк баш тарта. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көн дә тауыштар организмдың ҡуҙғыусанлығын һәм нервылар көсөргәнешлеген арттыра. Даими тауыш мөхитендә эшләүсе хеҙмәткәрҙәрҙә, күпселек осраҡта, аритмия вестибуляр аппараттың боҙолоуы һәм башҡа төрлө ауырыуҙар күҙәтелә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Донъяла күпме музыка стиле булһа, барыһының да үҙ тыңлаусыһы бар. Кемдер классик музыкаға өҫтөнлөк бирһә, икенселәр ҡаты һәм ауыр рок стилен үҙ итә, ләкин шуныһы факт: музыкаға битараф кеше юҡ. Тик уның үҙебеҙҙең һәм тирә-йүндәгеләрҙең һаулығына зыян килтермәүе шарт.**

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА әҙерләне.**

✓ *Үҙ ғүмерендә, ир уртаһы йәшенә лә етмәйенсә, ике йөҙҙән ашыу бура бураған ул. Эш юҡ, тейешенсә түләмәйҙәр, тип, булмағанды көтөп, бушҡа ваҡыт уҙғарып йөрөмәй ул.*



*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

**Йыш ҡына, ир кеше үҙ ғүмерендә ағас ултыртырға, өй һалырға һәм ул үҫтерергә бурыслы, тип һөйләргә яратабыҙ. Тик күп осраҡта тормош тигәнең һин теләгәнсә генә тәгәрәй һалып бармай. Маңлайына яҙылған тәҡдире шулай буламы, әллә инде тормош һикәлтәләре, яҙмыш елдәре кешенең ниәттәрен, хыялдарын шулай үҙгәртәме, был бурысты барыһы ла үтәй алмай ҙа ҡуя. Бының өсөн айырым таһыллыҡ, һәләт һәм дәрт, эшеңдең рәт-сиратына төшөнөп, уның тәртибен белеү ҙә талап ителә. Шуға күрә лә бындай сифаттарға эйә булыусылар айырым маҡтауға лайыҡ, тиһәк, бер ҙә хата булмаҫ. Бөгөнгө һүҙебеҙ ҙә нәҡ ошо хаҡта: бер түгел, ике ул һәм ҡыҙ үҫтереп, бихисап ағас ултыртып, үҙенә генә түгел, башҡаларға ла бынамын тигән күркәм йорттар һалып биреүсе балта оҫтаһы Суфиянов Фәрит Данияр улы хаҡында.**

# АҠСАНЫ УНЫ...

## бура бурап та эшләп була



Өй һалып сығыу барыһының да ҡулынан килерлек еңел эш түгел. Төҙөп сыҡҡан өйөң күңелгә ятырлыҡ матур ҙа, ныҡ та булһын өсөн әллә күпме көс һалырға, ҙур сығымдар түгергә тура килә. Шуға барыһы ла бындай оло эшкә тотонорға баҙнат итә һалып бармай, кеше яллауҙы хуп күрә. Йөрәтәт иткәндәренә иһә балта тота белергә генә түгел, ныҡыш та, сабыр ҙа, шул уҡ ваҡытта елкәһенең ҡалын, беләктәренең көслө булыуы ла мөһим. Был йәһәттән Фәрит Данияр улына икеләнеп тораһы түгел. Йәш саҡтан өйрәнгән һөнәренең файҙаһын күреп, шыңғырлап торған ауыр бүрәнәләрҙән күркәм йорттар төҙөп, мөйөшһөҙҙәрҙе мөйөшлө итеп, шатлыҡ-ҡыуаныс өләшеп йәшәй ул. Ғөмүмән, Учалы районының Батал ауылында тыуып үҫеп, бөгөнгө көндә ошо уҡ райондың Ҡобағош ауылында йәшәүсе Фәрит Данияр улы Суфияновты яҡын-тирә ауылдарҙа, күрше райондарҙа яҡшы беләләр. Уның улы Арсен менән бураған буралары маҡтап һатып алалар. Күп осраҡта еренә еткерелгән эштән ҡәнәғәт ҡалған хужалар һарай, мунса төҙөү, түшәм, иҙән һалыу кеүек эштәрҙе лә уларға ышанып тапшыра.

Йорт төҙөгәндә туғандарыңдың, дуҫтарыңдың кәңәш-ярҙамына таянмайынса ла булмай, әлбиттә. Фәрит Суфиянов та бура бурау серҙәренә нәҡ шул ваҡытта, ауылдаштар йолаһын һанлап, ярҙамға, өмәләргә йөрөгән саҡта төшөнә. Эшләгәне кешегә булһа ла, өйрәнгәне үҙенә ҡала. Кемдәрҙер оҙон аҡса артынан Себерҙә, йә күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән башҡа берәй тарафта йөрөгәндә, балта оҫтаһы иһә был аҡсаны үҙ ерендә лә эшләп табыуға өлгәшә. Бушҡа ғына оҫтаның ҡулы уртаҡ тимәйҙәр шул. Шартына килтереп бура бурап, өй күтәрергә теләүселәр үҙҙәре үк уны эҙләп таба. Ғаиләһе матур, балалары етеш йәшәһен, тип тырышҡан оҫта береһен дә ярҙамһыҙ ҡалдырмай. Үҙ ғүмерендә, ир уртаһы йәшенә лә етмәйенсә, ике йөҙҙән ашыу бура бураған ул. Ил алдындағы бурысын үтәп ҡайтҡан улы Арсен да бөгөн атаһының алыштырғыһыҙ ярҙамсыһы. Эш юҡ, тейешенсә түләмәйҙәр, тип, булмағанды көтөп, бушҡа ваҡыт уҙғарып йөрөмәй ул. Әрме сафынан йөрөп ҡайтҡас та атаһы янында бура бурау эшенә ныҡлап тотона. Әлбиттә, икәүләп башҡарған эш тиҙерәк тә, уңышлыраҡ та була. Бөгөн аталы-уллы һалған йорттарҙа әллә күпме ғаилә үҙ усағын дөрләтеп, бәхетле ғүмер кисерә.

Һүҙ ҙә юҡ, эшеңдең рәтен белеп, заказ биреүселәрҙең көйөн табып кәсеп итеү анһат шөғөл түгел. Ә инде йорт һалыу кеүек яуаплы ла, ауыр ҙа эшеңде аҙағынаса уңышлы атҡарып сығаһың икән, үҙ донъяңды нығытыу, ғаиләңде ҡарау өсөн дә ярайһы ғына килем кеҫәңә инеп ята. Ҡайһы берүҙәр эш юҡ, аҡса етмәй тип зарланғанда, йүнселдәрҙең йүнен табып, гөрләтеп донъя көтөүе күңелдә һоҡланыу һәм ғорурланыу уята.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Аҙыҡ сәйнәү техникаһын үҙләштереү

**Асығып йөрөү практикаһы миңә тиңһеҙ тормош тәжрибәһе бирҙе. Мин әле асығыуҙың һаулыҡ өсөн файҙалы, ихтыяр көсөн, сыҙамлыҡты сыныҡтырыу өсөн мөһим булыуы хаҡында әйтмәйем. Әммә ошо процедура ваҡытында мин яңы ашау мәҙәниәтен үҙләштерә башланым. Шул хаҡта һөйләп үтәйем әле.**

Һис шикләнмәйенсә, шуны әйтә алам: барлыҡ аһзарҙарыбыҙ, ауырыуҙарыбыҙ һәм күңел төшөнкөлөгөнә йыш бирелеүебеҙ ауыҙыбыҙҙы тыя белмәгәнлектән килә. Үҙ ауыҙығыҙға үҙегеҙ хужа була белмәһәгеҙ, бер ни ҙә килеп сыҡмаҫ. Беренсенән, организмды эстән юҡҡа сығарыусы продукттарҙан баш тартырға кәрәк. Икенсенән, эсер өсөн һыуҙы бик һаҡ һайлау мөһим - һәр һыу ҙа организмдың сәләмәтлеген тәьмин итер өсөн ҡулайлы түгел. Өсөнсөнән, ризыҡты еренә еткереп сәйнәп, шунан ғына йоторға өйрәнегеҙ. Дүртенсенән, шыйыҡ аҙыҡты, эсемлектәрҙе ҡаты матдәләр кеүек ашарға өйрәнергә кәрәк. Мәҫәлән, һутты "сәйнәү" ауыр, әлбиттә. Ысынлап әйткәндә, миңә әле лә был еңелдән бирелмәй.

Ярты йыл самаһы мин аҙыҡты 10-12 тапҡыр булһа ла сәйнәргә өйрәндем. Ләкин миңә бит был һанды 25-кә хәтлем булһа ла еткерергә кәрәк ине. 33-40 тапҡыр сәйнәү - бына шул ине минең маҡсат. Бөгөн дә ҡайһы берҙә мин аҙыҡты бары тик 6-7 тапҡыр сәйнәп йотам. Был хайуан инстинкттарының эҙемтәһе булыуы мәғлүм инде: этте мәжбүр итеп ҡара әле ризығын еренә еткереп сәйнәргә! Бер нәмә лә килеп сыҡмаҫ. Аң ғына кешегә тәненең хайуанлыҡ инстинкттары менән идара итергә ярҙам итә. Нәҡ шуны мин тормош тәжрибәмдә эшләргә тырышам. Иртән аҙыҡты егерме тапҡыр сәйнәргә булдырып була булыуын. Иртәнге ашты ошо тиклем сәйнәп ашаһаң, организм үҙен бик шәп тоя. Ашҡаҙанға ла ҡыйын түгел, оптимизм һәм ҡәнәғәтлеҡ тояһың. 11 сәғәттәр тирәһендә артабанғы байрамды көтәһең: тиҙҙән төшкө аш! Кисен тағы бер байрам - киске аш. Ярым асығыу хәлендә көн итеүҙән дә яҡшыраҡ нәмә юҡ икән ул! Хәҙер генә мин "Тормош байрам кеүек гөрләй" тигәнде аңлай башланым. Ундай тормош аҙыҡты кәрәккәнсә, еренә еткереп ашарға өйрәнгән вегетариандарға бирелә икән.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Камиллыҡҡа илтеүсе этәргес көс

Этәргес көстә һәм инерцияла ниндәйҙер мөғжизә бар. Тау башынан старт алған саңғыҫы үҙенең хәрәкәтен яйлап башлап, тау түбәненә туҡтатып булмаған тиҙлектә шыуған кеүек, һеҙ ҙә камиллыҡта бәләкәй генә уңыш ярҙамында өлгәшелгән инерция көсөн төп маҡсатығыҙҙа - матур тормош йүнәлешендә файҙалана алаһығыҙ.

Аҡыл көйләнешендә, күнекмәләрҙе программалауҙа, диетағыҙҙа һәм ғәҙәттәрегеҙҙә иң аҙҙан башлағыҙ. Тиҙҙән аҙымдарығыҙ киңәйер, һөҙөмтәләрегеҙ күҙгә күренерлек булыр һәм артабан һеҙҙе тотоп тыйып та булмаясаҡ. Мең саҡырымға һуҙылған юл беренсе аҙымдан башлана, һеҙгә лә ҙур һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн бәләкәй аҙымдарҙан башларға кәрәк.

Аҡыл үҫеше өлкәһендә һеҙ үҙ-үҙегеҙҙе дәртләндереү өсөн китаптар, ыңғайға көйләүсе идеялар, аҡылды һәм сыҙамлыҡты йәнләндереп ебәрә торған диета ҡулланығыҙ, шулай итеп үҙегеҙгә хөрмәт күрһәтегеҙ. Тәүге көндәрҙә был ғәмәлгә бер нисә минут сарыф итһәгеҙ, артабан, һөҙөмтәләр күренә башлағас, интеллектығыҙҙың ҡеүәтен арттырыуға күберәк ваҡыт бүләсәкһегеҙ. Алдан әйтелеүенсә, мейе тәнегеҙҙең башҡа мускулдарынан бер нәмә менән дә айырылмай. Улар көсһөҙләнмәһен өсөн даими көсөргәнештә торорға кәрәк. Ә инде мейене көсөргәнештә тотоу ғына түгел, уны ваҡыт-ваҡыт "төрткөләп", уның алдына бурыстар ҡуйып торорға кәрәк, юҡһа, ул бөтөнләй ялҡаулана башлаясаҡ.

Әгәр һеҙ алға бармайһығыҙ икән, тимәк, артҡа тәгәрәйәсәкһегеҙ. Ә инде аҡылығыҙҙы даими рәүештә "тәмлекәстәр" менән һыйлап, уны күнекмәләр ярҙамында камиллыҡҡа еткерәһегеҙ икән, һеҙгә мотлаҡ уңыш йылмайыр һәм үҙегеҙ хыялланып та ҡарамаған бәхет килер.

Аҡыл көйләнешен иң юғары бейеклеккә күтәрәсәк инерция көсө һеҙҙең тәнегеҙҙе лә физик камиллыҡҡа еткерергә һәләтле. Һәр кемдең эсендә бығаса ихтыяж тыумаған батыр кеүек үҙенең ваҡыты еткәнен көтөп йоҡлап ятыусы физик сәләмәтлек фонтаны бар. Бары тик үҙеңә ошо ныҡлы сәләмәтлек океанын асырға ла, уға үҙен күрһәтеү мөмкинлеген бирергә генә кәрәк.

Иң яҡшы дауалаусы - ул изге уйҙар, өмөттәр, ҡыйыулыҡ, көс һәм гармония менән тулы аҡыл. Тәнегеҙҙе шыйыҡлыҡ күп булған аҙыҡ-түлек (еләк-емеш һәм йәшелсә) һәм башҡа йәшәү көсө биргән сығанаҡтар диетаһы менән балансҡа килтереп, һеҙ уға үҫмер сағығыҙҙың формаһын бирә алаһығыҙ. Диетағыҙға һиҙелмәҫлек, әммә бик мөһим үҙгәрештәр индереп, үҙегеҙҙә сәләмәтлекте нығытыусы иҫ киткес инерцияны үҫтерә алаҫаҡһығыҙ.

Был ғәҙәт һеҙҙә дөрөҫ туҡланыу тәртибен нығытып, сәләмәтерәк тән, яҡшыраҡ дөйөм торош, ҡеүәтегеҙҙе тулыһынса файҙаланыу өсөн дәрт бирәсәк.

**Робин ШАРМА.**



## 8 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "На край света", 4-я серия (16+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
16.00 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (12+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Однолюбы", 1-я и 2-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.20 "Без свидетелей". Сериал (16+)
00.50 "Пропавший без вести" (16+)
01.40, 03.05 "Белый плен"
03.00 Новости
04.00 "Детройт 1-8-7" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Люблю, не могу!" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Женить Казанову", 5-я и 6-я серии. Мелодраматический сериал (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.35 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Собачья работа", 1-3-я серии. Сериал (12+)
00.20 "Девчата" (16+)
01.00 "Вести+"
01.20 "Иди домой". Драма (16+)
03.25 "Комната смеха"
04.25 "Городок. Дайджест"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.35 "Возвращение Мухтара-2". Детективный сериал (16+)
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Инспектор Купер". "Одноклассники". Сериал (16+)
21.25 "Карпов". Криминальный сериал (16+)
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Проснемся вместе?". "Авария", "Муки совести". Комедийный сериал (16+)
01.30 "Центр помощи "Анастасия" (16+)
02.15 "Москва - Ялта - транзит"
03.15 "Без следа". Сериал (16+)
04.55 "Час Волкова". Детективный сериал (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00 "Новости недели" (на башк. яз.) (16+)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (16+)**
**11.45 "Новости недели" (на русск. яз.) (16+)**
**12.15 "Сказка №... (16+)**
**12.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.) (16+)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.30 "Новости" (на башк. яз.) (12+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Прощание с веком". Мустай Карим. Часть I (6+)**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Зеркальце" (6+)**
**16.00 "Бауырхак" (6+)**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 "Дорога к храму"**
**17.15 "Надо знать!")**
**17.45 "Арслан" (16+)**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сэнгелдек"**
**22.00 "Следопыт"**
**22.15 "Позывной "Барс"**
**23.00 "Еду я в деревню"**
**23.30 Художественный фильм (16+)**

## 9 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "На край света", 5-я серия (16+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
16.00 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (12+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Однолюбы", 3-я и 4-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.20 "Без свидетелей". Сериал (16+)
00.50 "Обитель лжи" (18+)
01.20 "Калифрения" (18+)
01.55, 03.05 "Ночь с Бет Купер" (16+)
03.00 Новости
03.50 "Детройт 1-8-7" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Люблю, не могу!" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Женить Казанову", 7-я и 8-я, зак. серии. Мелодраматический сериал (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Собачья работа", 4-я и 5-я серии. Сериал (12+)
23.20 "Специальный корреспондент" (16+)
00.25 "Вызываю дух Македонского. Спиритизм"
01.25 "Вести+"
01.50 "Честный детектив" (12+)
02.20 "Сирены" (16+)
04.10 "Городок. Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.35 "Возвращение Мухтара-2". Детективный сериал (16+)
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Профессия - репортер" (16+)
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Инспектор Купер". "Ниночка". Сериал (16+)
21.25 "Карпов". Криминальный сериал (16+)
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Проснемся вместе?". "О, Ж, П. А", "Подруги". Комедийный сериал (16+)
01.30 "Главная дорога" (16+)
02.05 "Москва - Ялта - транзит"
03.00 "Без следа". Сериал (16+)
04.55 "Час Волкова". Детективный сериал (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы"**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (16+)**
**11.45 "Наши годы. 1970-е"**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.) (16+)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Прощание с веком" Мустай Карим. Часть II (6+)**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Книга сказок"**
**16.00 "Борсак"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.45 "Ловцы душ" (16+)**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**17.45 "Байык-2012"**
**18.45 Первенство Футбольной национальной лиги. ФК (Уфа) (Уфа) - ФК "Енисей" (Красноярск). Прямая трансляция. В перерыве: Новости (16+)**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**23.15 "Взгляд без слов" (12+)**
**23.30 Художественный фильм (16+)**

## 10 ОКТЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "На край света", 6-я серия (16+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
16.00 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Однолюбы", 5-я и 6-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Ночные новости"
00.20 "Без свидетелей" (16+)
00.50 "Белый воротничок" (16+)
01.40, 03.05 "Провинциалка". Комедия (16+)
03.00 Новости
03.35 "Следствие по телу" (16+)
04.25 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Люблю, не могу!" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь"
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Принцесса и нищенка", 1-я и 2-я серии. (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Собачья работа", 6-8-я, закл. серии (12+)
00.20 "АЛСИБ. Секретная трасса"
01.25 "Вести+"
01.50 "Крещендо" (16+)
03.35 "Станционный смотритель" (12+)

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.35 "Возвращение Мухтара-2". Детективный сериал (16+)
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Профессия - репортер" (16+)
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Инспектор Купер". "Наследник по прямой" (16+)
21.25 "Карпов". Сериал (16+)
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Проснемся вместе?" "Обручальное кольцо", "Пуля" (16+)
01.30 "Квартирный вопрос"
02.35 "Москва - Ялта - транзит"
03.15 "Без следа" (16+)
04.55 "Час Волкова". Сериал (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30 "Гора новостей" (6+)**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент" (6+)**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (16+)**
**11.45 "Наши годы. 1970-е"**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (16+)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Учим башкирский язык"**
**15.00 Прямая трансляция с торжественного собрания, посвященного Дню Республики**
**16.45 "Здоровое решение" (12+)**
**17.15 "Надо знать!"**
**17.45 "Алтын тирмэ"**
**18.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань). Прямая трансляция. В перерыве: Новости (16+)**
**22.00 "Историческая среда"**
**23.15 "Взгляд без слов" (12+)**
**23.30 Художественный фильм (16+)**

## 11 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "На край света", 7-я серия (16+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
16.00 "Улицы разбитых фонарей" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Однолюбы", 7-я и 8-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Ночные новости"
00.20 "Без свидетелей", 29-я серия (16+)
00.50 "Гримм" (16+)
01.40, 03.05 "Пик Данте". Триллер
03.00 Новости
03.45 "Следствие по телу" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 " Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Люблю, не могу!" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь"
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Принцесса и нищенка". Сериал (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Лорд. Пес-полицейский", 1-я и 2-я серии (12+)
23.20 "Поединок" (12+)
01.00 "Вести+"
01.25 "Жду и надеюсь". Военная драма (12+)
04.10 "Городок. Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.35 "Возвращение Мухтара-2". Детективный сериал (16+)
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны" (16+)
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Инспектор Купер". "Стилист" (16+)
21.25 "Карпов". Сериал (16+)
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Проснемся вместе?" "Махнемся, не глядя?" "Опасные дороги" (18+)
01.30 "Дачные ответ"
02.30 "Москва - Ялта - транзит"
03.15 "Без следа" (16+)
04.55 "Час Волкова". Сериал (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**07.15 "С праздником, Республика!"**
**08.00 "Фильм детям"**
**09.30 "Радуга дружбы"**
**10.30 "Пою мое Отечество, республику мою"**
**11.15 "Замандаштар" (6+)**
**11.30 "Чудесный край благословенный"**
**12.45 "Современники"**
**13.15 "Соцветие Башкортостана"**
**14.45 "Прощание с веком". Мустай Карим. Часть III (6+)**
**15.15 "Кавказская пленница" (на башк. яз.) (12+)**
**16.45 К 150-летию Михаила Нестерова. Торжественный вечер в БГТОиБ**
**17.45 "А.-З. Валиди: человек пера и сабли" (6+)**
**18.45 "Шэжэре-байрам, посвященный родословным участников Отечественной войны 1812 года" (12+)**
**19.30 "Золотое наследие" (12+)**
**20.00 "Сэнгелдек"**
**20.15 Репортаж с торжественного собрания, посвященного Дню Республики**
**21.30 Новости (на русск. яз.) (16+)**
**22.00 "Уфа - город дружбы и единства". Концерт**

## 12 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "На край света". Сериал (16+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
16.00 "ЖКХ" (12+)
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Поле чудес"
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Голос". Вокальный конкурс (12+)
23.15 "Без свидетелей", 30-я серия (16+)
23.45 "Джордж Харрисон: Жизнь в материальном мире". Док. фильм (16+)
01.35 "Французский связной-2". Боевик (16+)
03.55 "Отскок" (12+)

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России"
06.05, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести - Башкортостан"
08.55 "Мусульмане"
09.05 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Люблю, не могу!" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Евросинья. Таежная любовь"
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - ПФО"
17.50 "Нормандия - Нема. В небесах мы летали одних"
18.45 "Принцесса и нищенка", 5-я и 6-я серии (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.50 Футбол. Чемпионат Мира-2014. Отборочный турнир. Россия - Португалия
22.55 "Лорд. Пес-полицейский" (12+)
00.50 "Разоблачение" (16+)
03.35 "Городок. Дайджест"
04.05 "Комната смеха"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.40 "Женский взгляд"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели" (16+)
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт" (16+)
14.35 "Таинственная Россия" (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Инспектор Купер". "Для тех, кому за сорок" (16+)
21.25 "Карпов". Сериал (16+)
00.20 "Подмена". Драма (16+)
03.05 "Спасатели" (16+)
03.40 "Без следа" (16+)
04.30 "Час Волкова". Сериал (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Галямат донъя" (6+)**
**11.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 "Новости" (на русск. яз.) (16+)**
**11.45 "Память сердца"**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (16+)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Звезды сцены". Фидан Гафаров**
**15.15, 17.45 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Байтус" (6+)**
**16.45 "Семь жемчужин" (16+)**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**18.00 "Йома"**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сэнгелдек"**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**23.00 "Башкорт йыры-2012"**
**23.30 "Дарман"**
**00.15 "Мелодии любви". Концерт**

## 13 ОКТЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Стамбульский транзит" (16+)
06.00 Новости
07.30 "Играй, гармонь любимая!"
08.20 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. ПИН-код"
09.00 "Умницы и умники" (12+)
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак" (12+)
10.55 "Анна Самохина. Не родись красивой"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Абракадабра" (16+)
15.00 Новосби (с субтитрами)
15.15 "Абракадабра" (16+). Продолжение
18.00 Вечерние новости
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым" (16+)
19.20 "Да ладно!" (16+)
19.50 "Человек и закон" (16+)
21.00 "Время"
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым" (16+)
22.50 "Что? Где? Когда?"
00.00 "Легенды русского рока" (18+)
01.40 "Леопард". Драма (18+)
04.45 "Следствие по телу" (16+)

### РОССИЯ 1

04.50 "Выстрел в спину". Детектив
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок. Дайджест"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Специальный корреспондент"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив" (12+)
12.25 "Гаишники". Сериал (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Гаишники". Продолжение (12+)
15.00 "Субботний вечер"
16.30 "Танцы со звездами". Сезон-2012
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Деревенская история". Мелодрама (12+)
00.30 "Королева льда". Мелодрама (12+)
02.35 "Горячая десятка" (12+)
03.40 "Мой сын, мой сын, что ты наделал?" Криминальная драма (16+)

### НТВ

05.35 "Супруги". Сериал (16+)
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Золотой ключ"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога" (16+)
10.55 "Кулинарный поединок" с Оскаром Кучерой"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Отставник-3". Детектив (16+)
15.10 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..." (16+)
17.20 "Очная ставка" (16+)
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер" (16+)
19.55 "Программа Максимум. Расследования, которые касаются каждого" (16+)
21.00 "Русские сенсации" (16+)
21.55 "Ты не поверишь!" (16+)
22.55 "Метла" (16+)
23.55 "Луч Света" (16+)
00.30 "Школа злословия". Ток-шоу (16+)
01.15 "Погоня за тенью". Сериал (16+)
03.15 "Без следа" (16+)
05.00 "Час Волкова". Сериал (16+)

### БСТ

**07.00 "Новости" (на башк. яз.) (16+)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Фильм детям"**
**09.15 Мультфильм (на башк. яз.)**
**09.45, 12.45 "Надо знать!"**
**10.00 "Бахетнама"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Арслан" (16+)**
**12.00 "Следопыт"**
**12.15 "Позывной Барс"**
**12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (16+)**
**13.00 "Замандаштар"**
**13.30 "Здоровое решение" (12+)**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Балкыш". Нурия Ирсаева"**
**16.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Слован" (Братислава). Прямая трансляция. Во втором перерыве: Новости (16+)**
**19.30 "Башкорттар"**
**20.00 "Сэнгелдек"**
**20.15 "Деловой Башкортостан"**
**20.30 "Отдел культуры"**
**21.00 "Специальный репортаж" (16+)**
**22.00 "Диспут-клуб "Пятый угол" (16+)**
**22.45 "Смелая музыка" (16+)**
**23.45 Международный фестиваль джазовой музыки. Часть I**

## 14 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Ход конем". Комедия (12+)
07.45 "Служу Отчизне!"
08.20 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. ПИН-код"
08.55 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" (12+)
10.35 "Пока все дома" (12+)
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Кривые зеркала" (16+)
13.10 "Условия контракта". Сериал (16+)
17.10 "Большие гонки. Братство колец" (12+)
18.40 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига
21.00 "Воскресное Время"
22.00 "Моя безумная семья". Комедия (12+)
22.30 "На ночь глядя" (16+)
00.25 "Элементарно". Сериал (16+)
1.20 "Только она - единственная". Комедия (16+)
03.10 "Больше меня" (16+)"

### РОССИЯ 1

05.35 "Пядь земли". Военная драма
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести - Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Путь к себе". Мелодрама (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Путь к себе". Продолжение (12+)
15.45 "Рецепт ее молодости"
16.15 "Смеяться разрешается"
18.15 "Битва хоров"
20.00 "Вести недели"
21.25 "Жизнь и судьба". Мелодрама (12+)
00.15 "Битва хоров". Итоги
00.20 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+)
02.05 "Дон Жуан де Марко". Романтическая комедия (16+)
03.55 "Комната смеха"

### НТВ

06.00 "Супруги". Детективный сериал (16+)
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача" (16+)
10.55 "Еда без правил" с Сергеем Жигуновым"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Свадьба в подарок!"
14.15 "Таинственная Россия: от Красноярска до Якутии. Куда упал тунгусский метеорит?"
15.10 "Своя игра" (16+)
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски" (16+)
17.20 "И снова здравствуйте"
18.20 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание" (16+)
20.50 "Центральное телевидение. Информационно-развлекательный воскресный канал" (16+)
23.20 "Поцелуй в голову". Криминальная драма (16+)
01.30 "Погоня за тенью". Сериал (16+)
03.20 "Без следа" (16+)
05.00 "Час Волкова". Сериал (16+)

### БСТ

**07.00, 18.30 Новости (16+)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**09.00 "Йома"**
**09.30 "Автограф"**
**10.00 "Баурсак"**
**10.10 "Городок АЮЯ"**
**10.20 "Шэп арба"**
**10.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Шатлык йыры"**
**11.00 "Байтус" (6+)**
**11.15 "Семэр"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.45 "Алтын тирмэ"**
**12.30 Новости недели (16+)**
**13.00 "Тэмле"**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 "Дарю песню" (6+)**
**15.00 "Замандаштар" (6+)**
**15.30 "Хазина"**
**16.00 "Дорога к храму"**
**16.30 "Орнамент" (6+)**
**16.45 "Газпромтрансгаз Уфа"**
**17.00 "Историческая среда"**
**17.30 "Полезные новости" (12+)**
**17.45 "Звезды сцены"**
**18.45 "Специальный репортаж" (16+)**
**19.00 "Учим башкирский язык"**
**19.15 "Волшебный курай" (6+)**
**19.45 "Сэнгелдек"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.30 "ФК "Уфа"**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 "Новости недели" (на русск. яз.) (16+)**
**22.00 "Байык-2012"**
**22.45 "Вечер.com" (12+)**
**23.30 Международный фестиваль джазовой музыки. Часть II**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# УҠЫТЫУСЫ - ИЗГЕ ЙӘН




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**39-сы һандағы сканворд яуаптары:**

**Горизонталь буйынса:** Бандитизм. Ньюфаундленд. Мәстәк. Мөйөш. Дәүер. Блокада. Борғо. Биксурин. Серге. Циферблат. Сауҙа. Йәнтүрин. Бот. Аран. Ерә. Практика. Ессентуки. Кәтүк. Мортазин. Көлтә. Клеш. Сафари. Евразия. Айырма. Ҡотоев. Йыуаныс. Ырым. Алйырҙан. Аҡлан. Салбар. Лирика. Вазифа. Әүен.

**Вертикаль буйынса:** Бүре. Бифштекс. Лафет. Әтнәкә. Кобра. Киев. Рагу. Нәмә. Дастан. Иңкеш. Айытҡолов. Буфет. Ялман. Кирбес. Дана. Сана. Метр. Ҡарсыға. Ләлә. Ишемйәрова. Ыуыҙ. Шомбай. Паром. Нарзан. Әмер. Олатай. Алдыр. Ситлек. Тувалу. Тыуса. Рами. Зиндан. Нағасы. Нәркәс.

## ӘЙТКӘНДӘЙ:

**Үткән номерҙағы сканвордҡа дөрөҫ яуаптар табып, беренсе булып Федоровка районының Бала-Сытырман ауылынан Гөлшат Мәүлитова һәм Салауат ҡалаһынан Ғәлиә Айытҡолова шылтыратты һәм Башҡорт дәүләт филармонияһы концертына билетка лайыҡ булды.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 октябрь "Коҙаса"** (Б.Бикбай, З.Исмәғилев), музыкаль комедия
**7 октябрь "Бер мәл санаторийҙа"** (Н.Ғәйетбай), комедия
**9 октябрь "Эдип батша"** (Софокл), хаким ҡарашынан сәхифә
**10 октябрь "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим), трагедия
**11 октябрь "Шәүрәкәй"** (М.Буранғолов), трагедия
**12 октябрь "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф.Бүләков), комедия

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**11 октябрь "Көҙгө моңда дуҫтар һағышы"** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рәйес Вәғизовтың ижад кисәһе

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**10 октябрь "Ун өсөнсө йондоҙ"** (В.Ольшанский). Башлана 15.00
**12 октябрь "Йәнкиҫәккәйем"** (Т.Миңнуллин), комедия

ТӨРЛӨҺӨНӨН



# ҺАЛҠЫН ҠЫШ КӨТӘМЕ?

**Һуңғы йылдарҙа һауа торошоноң тотороҡһоҙ булыуына өйрәнеп тә бөттөк, буғай. Ҡыштарҙың йылдан-йыл йылыныуына, ә йәйҙәрҙең түҙеп торғоһоҙ эҫелегенә аптырамайбыҙ ҙа кеүек. Ләкин быйылғы ҡыш, Рәсәй гидромет үҙәге ышандырыуынса, үҙенең ысын йөҙөн "күрһәтәсәк", йәғни быйыл беҙҙә һыуыҡ һәм буранлы ҡыш көтә.**

Әлбиттә, бында һүҙ уртаса һауа температураһы хаҡында бара, сөнки мәҫәлән, Социзағы, Мәскәүҙәге һәм Яҡутстандағы климатты беҙҙекe менән сағыштырып булмай. Быйылғы ҡыштың, белгестәр фекеренсә, ике үҙенсәлеге күҙәтеләсәк. Беренсенән, һауа температураһы үтә лә тотороҡһоҙ буласаҡ, йәғни күк йөҙөн болоттар ҡаплап, еүеш ҡар яуыуы, ҡояшлы күк йөҙә тешкә үтерлек һыуыҡтар менән алмашыуы ихтимал. Былай контраст айырыуса Рәсәйҙең Европа өлөшөндә күҙгә ташланасаҡ. Икенсенән, ҡыш яйлап "хәрәкәткә киләсәк", йәғни һыуыҡтарҙың иң әсеһе февраль айына тура киләсәк.

Киләһе ярты йылға синоптиктар түбәндәге прогноздарҙы бирә. Волга буйы, Урал, Коми һәм Себер халҡы өсөн октябрь йылы булыуы менән иҫтә ҡаласаҡ, сөнки был төбәктәрҙә температура норманан бер аҙ юғары буласаҡ. Ҡалған төбәктәрҙә иһә ҡәҙимге октябрь һауа торошо көтөлә. Ноябрь ҙа Уралда, Хабаровск крайында һәм Амур өлкәһендә ғәҙәттәгегә ҡарағанда йылы буласаҡ. Башҡа төбәктәр был осорға ярашлы һауа торошонда йәшәйәсәк, ләкин шул уҡ ваҡытта уларҙы елле һәм ҡарлыямғырлы һауа торошо ла урап үтмәйәсәк. Декабрҙә иһә Краснодар крайында, Яҡутстанда һәм Алыҫ Көнсығышта ғәҙәти булмаған йылы һауа торошо, ә Рәсәйҙең ҡалған төбәктәрендә был ай уҙған йыл менән сағыштырғанда һалҡыныраҡ буласаҡ. Яңы йылдың тәүге айында һауа торошо Рәсәйҙең бар төбәгендә лә ғәҙәти нормала, ләкин 2011 йылғы ғинуар менән сағыштырғанда күпкә һыуығыраҡ булыр, тип көтөлә. Хабаровск крайы, Яҡутстан һәм Магаданда ҡыштың һуңғы айы ғәҙәттәгенән йылыраҡ, ә илдең Европа өлөшөндә һәм Уралда һыуығыраҡ буласаҡ. Шулай ҙа синоптиктар үҙәккә үтерлек һалҡындар вәғәҙә итмәй. Яҙ иһә, айырыуса илдең үҙәк төбәктәрендә, иртә һәм тиҙ киләсәк, тип белдерә белгестәр, ләкин былдай арауыҡҡа прогноздарҙы 70 процент дөрөҫлөк менән генә әйтеп була икәнлегенә лә баҫым яһайҙар.

## ИҒЛАНДАР

Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан ғилми-тикшеренеү үҙәгенә **баш бухгалтер, баш бухгалтер урынбаҫары, генераль директорҙың сауҙа буйынса урынбаҫары, сауҙа эшен белгән белгестәр, компьютер буйынса белгес** (система администраторы) кәрәк. Шылтыратырға: **223-03-74, 223-03-33**.

* * *

Немец, инглиз һәм итальян телдәренән дәрес бирәм. **Шылтыратырға: 8-919-149-64-65** - Тәнзилә.

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

# ШӘЖӘРӘ БАЙРАМЫ...

## Ҡаһым түрә ауылынан башланды



**Тәбиғәттең насар көнө юҡ, тиҙәр. Бөтөн нәмә кешенең кәйефенән, мөнәсәбәтенән тора. Стәрлетамаҡ ҡалаһында уҙған Шәжәрә байрамында ла унда ҡатнашыусылар йөҙөндәге шатлыҡ-ҡыуаныстан, уларҙың алсаҡлығынан, күңелдәрҙән урғылып сыҡҡан йыр-моңдан хатта тәбиғәттең иртәнге һалҡын тыны ла йылынғандай булды.**

Республиканың төрлө төбәгенән килгән конкурста ҡатнашыусы ғаиләләрҙең шәжәрәһе, ҡул эштәре, ғөмүмән, тоҡом тамырҙары менән танышҡан арала Республика халыҡ ижады үҙәгенең фольклор буйынса баш белгесе, баһалама комиссияһы ағзаһы Фәнисә Аҡчурина сараның төп мәлдәре хаҡында бәйән итергә лә өлгөрҙө.

- Шәжәрә байрамы Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең 2006 йылда ҡабул иткән ҡарарына ярашлы уҙғарыла. Дәүләт кимәлендә был байрам Баҡалы, Әлшәй, Илеш, Краснокама райондарында үтте. Быйыл уның Стәрлетамаҡ ҡалаһында уҙғарылыуы осраҡлы түгел, сөнки хәҙерге ҡала һәм район биләмәһендә билдәле шәхесебеҙ - Ҡаһым Мырҙашев (Ҡаһым түрә) тыуған. Шуға ла байрам программаһы Айыусы ауылында батырыбыҙ хөрмәтенә ҡуйылған стелаға сәскәләр һалыуҙан башланды.

Башҡа йылдарҙан айырмалы, быйылғы шәжәрә төҙөүселәргә шарттар бер аҙ ҡатмарлаштырылған - улар мотлаҡ 1812 йылға Ватан һуғышында ҡатнашыусы ауыл бай ... яугирҙың варисы булырға тейеш ине. Шулай уҡ сара сиктәрендә төрлө һынлы сәнғәт, ҡул эштәре, конкурста ҡатнашмаған шәжәрәләр күргәҙмәһе ойошторолдо. Бөгөнгө байрамға Башҡортостандың төрлө төбәгенән, төрлө милләт, төрлө һөнәр эйәләре: башҡорт, белорус, татар, сыуаш, рус милләтенән булған 11 ғаилә һайлап алынды.

Ысынлап та, шәжәрә төҙөүселәр һәм конкурста ҡатнашыусылар тамырҙарын 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға алып барып бәйләргә тырышҡан. Стәрлетамаҡтан Ҡасимовтар, Исхаҡовтар һәм Саҙрисламовтар ҡаһарман Ҡаһым түрә тоҡомон дауам итеүселәр булһа, Ғайсиндар - Байыҡ сәсән нәҫеленән. Шулай уҡ был сарала аҫыл дворян нәҫелдәре - Ейәнсура районынан Ҡыуатовтар һәм Стәрлетамаҡ районынан Аҡсулпановтар ҙа ҡатнашты (был тоҡомдоң данлы улдары тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәтте гәзитебеҙҙең "Башҡорт ҡамусы" рубрикаһынан таба алаһығыҙ). Саҡмағош районынан килгән Бакировтарҙың ҡарт олаталары Аҫылғужа Бакиров 4-се Башҡорт полкында старшина булған.

Шулай ҙа Асҡын районынан Зәғәфүрән Ибраһимовтың тоҡомдары төҙөгән шәжәрә үҙенең күләме (әлегә бында 19-20 быуын ингән, тағы ла 300-ҙән ашыу кешене индерергә кәрәк, тиҙәр), фәнни нигеҙлә булыуы һәм биҙәлеше менән баһалама ағзаларын да, ҡыҙыҡһыныусыларҙы ла таң ҡалдырҙы. Ләкин шуныһы үкенесле - улар конкурстан тыш ҡатнашыусылар ине.

"Шәжәрәлә 1812 йылғы ваҡиғаларҙы аныҡ сағылдырған өсөн" номинацияһында Аҡсулпановтар ғаиләһе (Стәрлетамаҡ районы), "Башҡорттарҙың ырыу тарихын һаҡлаған һәм популярлаштырған өсөн" - Ҡарамышевтар (Ишембай районы), "Традицияға тоғролоҡ өсөн" - Бурдыко-Пивоварцевтар (Стәрлетамаҡ ҡалаһы), "Халыҡ байрамын музыкаль-этнографик яҡтан үҙенсәлекле биҙәгән өсөн" - Григорьевтар (Стәрлетамаҡ ҡалаһы), "Шәжәрә төҙөгәндә фәнни ҡаҙаныштарҙы һәм архив материалдарын файҙаланған өсөн" - Тикеевтар (Иглин районы), "Шәжәрә төҙөгәндә тәрән фәнни ҡараш өсөн" - Ҡыуатовтар (Ейәнсура районы), "Шәжәрәне өйрәнгәндә быуындар ныҡлығы һәм фәнни табыштар өсөн" - Бакировтар (Саҡмағош районы), "Атаолатайҙар иҫтәлеген һаҡлаған өсөн" - Исхаҡовтар (Стәрлетамаҡ районы), "1812 йылғы һуғыштың тарихи хәтерен һаҡлаған өсөн" - Ҡасимовтар (Стәрлетамаҡ районы) һәм Саҙрисламовтар (Стәрлетамаҡ ҡалаһы), "Генеалогия ағасын үҙенсәлекле биҙәгән өсөн" - Ғайсиндар (Салауат районы) ғаиләһе бүләкләнде.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Башҡортостанда башҡорт халҡы ғына түгел, барлыҡ милләттәр ҙә ҡунаҡсыллығы менән айырылып тора. Әммә был сифат ҡайһы берҙә саманан ашып та китә. Халҡыбыҙҙың тарихына ҡағылған сараларҙа йороғондо шундай күренештәр күңелде ҡыра. Мәҫәлән, Благовар районында булған сарала немец мәҙәни үҙәге ҡунаҡтар ҡаршылағанда милли эсемлек тип һыра тәҡдим итһә, Стәрлетамаҡ ҡалаһында уҙған әлеге Шәжәрә байрамында сыуаштар шампан шарабы менән "һыйланы", хатта матбуғат вәкилдәренә сәмәй (самогон) тәҡдим иткән осраҡтар ҙа күҙәтелде. Шундай күренештәр дауам итһә, тиҙҙән милли, халыҡ байрамдарын да асыҡтан-асыҡ эске байрамына әүерелдермәбеҙме? Шуныһы борсолдора... Бәлки, киләсәктә бындай күренештәр булмаһын өсөн, ойоштороусылар исемлегенә "Айыҡ Башҡортостан" республика ижтимағи хәрәкәтен дә индерергә кәрәктер?**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

АТЫҢ КЕМ?

# АҒАЙ МЕНӘН ҠУСТЫ...

## бер-береһе өсөн өҙөлә



Белорет ҡалаһында йәшәүсе Ғәзим һәм Ләйсән Шаһияздановтар ғаиләһендә ике ул үҫә. Ильясҡа 6 йәш, ә бәләкәй Әмиргә өс кенә ай. "Ҡусты һатып алыуҙы" нәҡ Ильяс үтенеп һораған да инде. Бының өсөн ул хатта әләсәләре биргән аҡсаһын уйынсыҡ алмайынса йыйып барған. Әле ул әсәһенә Әмирҙе ҡарарға ярҙамлаша һәм сит кешеләрҙә ҡустыһы янына яҡын ебәрмәскә тырыша. Балалар баҡсаһынан да ҡустыһы янына йүгереп ҡайта. Әмир ҙә ағаһын танып тора һәм Ильяс уның янына килһә, йылмайып, үҙенсә хәбәрен һөйләй.

Ильяс шулай уҡ йәнһүрәт ҡарарға, һүрәт төшөрөргә, уйынсыҡтары менән уйнарға ярата. Башҡортса йырҙар йырларға ла әүәҫ. Балалар баҡсаһында уҙғарылған "Дан минуты"нда ҡатнашып, күнеле булған. Балалар баҡсаһындағы тәрбиәселәрҙе лә, килгән ҡунаҡтарҙы ла Ильяс үҙенең аҡыллы булыуы, ололарҙы тыңлауы менән арбай.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# "ТИК"ТЕҢ АТАҺЫ...

## тегәнәккә батҡан

Үлгәндең бары ла ҡала, ҡалғандың йөрәге яна.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Донъяны яҡшыртыуҙың берҙән-бер ысулы - үҙеңде яҡшыртыу.

**(Элизабет Кюблер-Росс).**

Ҡатын-ҡыҙ яҡшы сифаттарға түгел, насарҙарына көнләшә.

**(Самюэл Джонсон).**

Тормошта бер дуҫың булыу - ул күп, ике дуҫың булыу -артыҡ күп, өс дуҫың булыу...мөмкин булмаған хәл.

**(Генри Адамс).**

Һуғыш мөхәббәткә оҡшаш- ул һәр саҡ юлын таба.

**(Бертольд Брехт).**

Бөйөк кешеләр һәйкәлгә нигеҙҙе үҙҙәре төҙөй, ә һәйкәлде иһә киләсәк ҡуя.

**(Виктор Гюго).**

Алдаҡ дөрөҫлөк һымаҡ уҡ бер йөҙлө булһа, беҙҙең хәлебеҙ еңелерәк булыр ине.

**(Мишель де Монтень).**

Һәр саҡ дөрөҫ эшлә - был ҡайһы берәүҙәргә ҡәнәғәтләнеү килтерер, ҡалғандарҙы аптыратыр.

**(Марк Твен).**

Беҙҙең менән көрәшкәндәргә рәхмәт: улар беҙҙең нервыларҙы нығыта, беҙҙең һәләтлекте һәм ҡылыҡтарҙы шымарта.

**(Эдмунд Берк).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:" Борон заманда һаранлыҡтары, көнсөллөктәре хаҡтин ашҡан ике күрше йәшәгән. Көндәрҙән бер көндө уларҙың берене ҡармағына алтын балыҡ эләктергән. Балыҡ телгә килгән һәм: "Мине киренән һыуға ебәрһәң, һинең өс шартыңды үтәйем", - тигән. Балыҡты эләктереүсе үҙенең көнитмеше яҡшырып китәсәген, күршеһенең танауына сиртәсәген уйлап, сикһеҙ шатланған. Әммә балыҡ үҙенең тағы ла бер шарты булыуын әйтеп, уны оло хафаға һалған: "Һинең бер теләгеңде үтәһәм, күршеңдең ике теләген үтәргә мәжбүр буласаҡмын - шул саҡта ғына беҙҙең килешеү бойомға ашасаҡ",- тигән балыҡ. Был һүҙҙәр көнсөл кеше күңелендәге шатлыҡты юҡҡа сығарған. Ни эшләргә? Бер тоҡ алтын һораһам, күршегә ике тоҡ алтын тейәсәк. Бер алтын һарай һораһам, күршенең ике алтын һарайы буласаҡ. Әмәлен таба көнсөл, балыҡҡа өс шартын әйтә:" Минең бер күҙем һытылһын, бер аяғым сатанлаһын, бер улым үлһен..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт: Әхмәр ҮТӘБАЙ, Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Таһир ИШКИНИН, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 5 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673
Тиражы - 5387
Заказ 3908